*...Хәҙер күпме башҡорт сабыйының*
*"Пап, мам" тиеп теле асыла.*
*Был бит шул уҡ утлы һарайҙарға*
*Инеп барыуыбыҙ асылда.*
*Сығып булмаҫ утлы һарайҙарға*
*Инеп бара бит һуң халҡыбыҙ.*
*Һөрәнләйем тағы дүрт тарафҡа:*
*Ҡапҡаларҙы яба һалығыҙ!*

**Рәйес ТҮЛӘК.**


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

28 МАЙ - 3 ИЮНЬ (ҺАБАНАЙ - ҺӨТАЙ) 2011 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуға хаҡы ирекле

№22 (440)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡош аулаған йәлсемәҫ...**



3

**Фермалар тергеҙелһә...**



4 ауылдар йәшәр һәм йәшәрер

**Юғары үрҙәргә артылырға...**

старт бирелде



6

**Ямғыр ер йәшәртер,**

фатиха ил йәшәтер



7

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Тормош матурланған һайын, кеше нәфсеһе арта бара. Кеше нәфсеһе хатта донъяға балалар тыуыуына ла ҡамасаулай, тигән фекер менән килешәһегеҙме?

***Әлфиә БАТТАЛОВА, журналист:*** Тормош матурлана, тигәндә матди өлкәне күҙҙә тотһаҡ, ысынлап та, кем өсөндөр быным йоғонтоһо насар. Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ысын мәғәнәһендә матур тормошта йәшәгән. Бында инде мин матди өлкәне күҙ уңында тотмайым. Хоҙай күпме матди байлыҡ биргән булһа, шуға риза булып, тәбиғәт менән ярашып йәшәгән халҡым, Хоҙай Тәғәлә күпме ҡушҡан, шунсама бала тапҡандар һәм тәрбиәләгәндәр. Әйткәндәй, бала үҙ ризығы менән тыуа, тигәндәр бит, беҙ ошоно онотоп ебәрәбеҙ буғай. Ә инде бөгөнгө заманда кеше үҙ тормошон үҙенсә матурларға тырыша, йәғни һарайҙай йорттар һалдыра, уны зиннәтле йыһаздар менән тултыра, типтереп йәшәй һәм ошоно матур тормош тип уйлай икән, ул, тимәк, Хоҙай ҡушҡанса түгел, ә нәфсе буйынса йәшәй башлай. Икенсе төрлө әйткәндә, кеше менән уның нәфсеһе идара итә. Нәфсе идара иткәндә кеше матди байлыҡ артынан ҡыуа, ә бала бағыуҙы аҡса эшләүгә киткән ваҡытын исраф итеү, артыҡ проблемалар тыуҙырыу тип кенә ҡабул итә.

***Мансур БАҺАУВ, юрист, Әбйәлил районы:*** Аҡса артынан ҡыуыу хәҙер айырыуса модала. Ә инде кеше йәштән аҡсаға өйрәнһә, аҡса табыу уның төп тормош маҡсатына, хатта характерына әүерелә. Ҡайһы берәүҙәрҙе белəм: фәҡәт аҡса артынан ҡыуып, улар ғаилә лә ҡормай, ҡорған хәлдә лә балаһыҙ, тимәк, проблемаһыҙ йәшәүҙе хуп күрә. Элек етешһеҙ ҙә йәшәнек, проблемалар ҙа күп булды, әммә һәр ғаиләлә 6-7 бала ине. Ағайҙарҙан ҡалған кейемдәрҙе кейҙек, ашауға ла талымһыҙ инек. Беҙҙең әсәйҙәр пособие, аҡса өсөн тапманы балаларҙы, хөкүмәттән ярҙам көтөп тә ултырманы. Әле бына ҡайһы бер ҡатындар бала табыуҙы кәсепкә әйләндерҙе, улар, бала кәрәк, тимәйҙәр, аҡсаһы кәрәк бит, тиҙәр. Бер ҡатынды беләм, ирһеҙ көйө дүртенсе балаһын тапты. Минең берҙән-бер көн күреү сараһы - балалар аҡсаһы, ти. Ауылда йәшәй, эшләмәй. Шул уҡ ваҡытта әлеге көндә ашы ла, эше лә булыуға ҡарамаҫтан, үҙен генә ҡайғыртып, бер генә бала менән сикләнгәндәр күп. Бер таныштың берҙән-бер балаһы ҡазаға осрап, һәләк булды. Ҡатыны башҡаса балаға уҙа алмай. Бына шулай, торҙо ла ҡалдылар икәүҙән-икәү. Аҡса бар - бала юҡ. Баланы һатып алып булмай, уларҙы Хоҙай Тәғәлә биргәндә алып ҡалырға кәрәк.

***Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, хаҡлы ялдағы уҡытыусы, Мәләүез ҡалаһы:*** Аҡса мәсьәләһе генә түгелдер бында. Тыуымдың кәмеүе, минеңсә, йәшәйешебеҙҙәге рухи көрсөк менән бәйле. Әгәр ҙә йәмғиәтебеҙ "ауырыу" булмаһа, кешеләр балаларының киләсәгенә өмөт менән ҡарар, уларҙы ишлерәк итеп табып, тәрбиәләр ине. Ә былай бит нисек килеп сыға: берәүҙең балаһын үлтереп китәләр, икенсеһенең балаһы урам йоғонтоһона бирелеп, наркоманға әйләнә. Беҙҙә хәҙер баланы мәктәпкә яңғыҙын сығарып ебәреү ҙә хәүеф-хәтәргә тиң. Уны алып барырға, алып ҡайтырға һәм, ғөмүмән, хәстәрләп, һәр ваҡыт эргәһендә булырға үҙенә махсус кеше кәрәк. Кәрәкме ни шундай "перспектива" ата-әсәгә? Һәр кемдең дә, аҡсалыһының да, аҡсаһыҙының да бала үҫтергеһе, үҙенә алмаш ҡалдырғыһы киләлер, тик йәмғиәттең хәл ителмәгән күп проблемалары кешене үҙ тәбиғи ихтыяжынан тыйылып торорға мәжбүр итә, тип уйлайым.

Әлбиттә, балаға пособиеһын, әсәлек капиталын түләй башланы дәүләт, ләкин бала тәрбиәләп үҫтереү өсөн был аҡса ғына аҙ, бер тапҡыр түләнә торған 363 мең һумға хатта торлаҡ мәсьәләһен дә тулыһынса хәл итеп булмай. Булһын ине лә бит беҙҙә лә ғәрәп илдәрендәге һымаҡ тәжрибә: унда тыуаһы балаға торлағын да әҙерләп ҡуялар, һаҡлыҡ кассаһында иҫәп тә асып ебәрәләр... Ә бит борон башҡортта ла булған ул йола: балаға малын да инселәгәндәр, йортон да һалғандар. Бына шул осраҡта баланың яҙмышы ышанысլы була. Юғиһә, әле бит беҙҙә балаларҙы етерлек дәрәжәлә социаль яҡлау юҡ, был тормош тәжрибәһе менән нығытылып килә. Улар йыш ҡына йә тегендә, йә бында барып төртөлә: ни мәктәптән һуң артабан уҡырға мөмкинлеге юҡ, уҡып бөткәндәре иһә эш таба алмай ҡаңғыра...

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

ҒАИЛӘ ҠОРО

# АТА-ӘСӘЙҘӘРҘЕҢ ӨЛГӨҺӨНДӘ...

## үҙ ғаиләбеҙҙе ҡорабыҙ

**Ғаилә йәмғиәттең бәләкәй генә күҙәнәге булып торһа ла, бөтә дәүләт хәле уның ниндәй хәлдә булыуына бәйле. Матур, имен, ныҡлы, бәхетле ғаиләләр күп булған һайын, дәүләт тә ныҡлы, имен булыр. Халыҡ та бит"Күсле ил - көслө ил", тигән. Бөгөнгө көндә баш ҡалабыҙҙа татыу донъя көткән, рухлы, аҡыллы улдар-ҡыҙҙар тәрбиәләгән йәш башҡорт ғаиләләре бихисап. Уларҙың татыу ғаиләләрен, саф башҡортса аралашҡан балаларын күреп ҡыуанаһың. Шундайҙарҙың береһе - Лилиә менән Даян МӨХӘМӘҘИНдар ғаиләһе. Был уңған ғаилә менән әңгәмәбеҙ башлыса ғаилә бәхете, тәрбиә, ир-егет һәм ҡатын-ҡыҙ бурыстары тураһында барҙы.**




**(Дауамы 8-9-сы биттәрҙә).**

*✓ Уй һәм камиллыҡ сығанағы булған аҡ ҡағыҙҙы ҡулға бик һирәк алабыҙ. Телевидение, интернет бар бит, тиерһегеҙ. Ышанығыҙ, улар аҡ ҡағыҙҙан уҡыу һөҙөмтәһен бирә алмай. Сөнки улар һине фекерләргә мәжбүр итмәй.*

*МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ*

**Ошо көндәрҙә Өфөлә йәшәүсе бер уҡыусыбыҙ: "Интернеттағы сайтығыҙҙан уҡыйым хәҙер "Киске Өфө"нө, яҙылып, аҡса сығарып тормайым..." - тип әйтеп ысҡындырҙы. Ярай, унышы ла яҡшы, тип уйланым мин. Һүҙгә һүҙ ялғанып, ниндәйҙер фекерҙәрҙе гәзитебеҙҙә яҙылған сығыштар менән йөпләйем дә, "Уҡығайныңмы шуны, унда был хаҡта әйтелә", тип өндәшәм. Әммә әңгәмәсем ул сығыштарҙы хәтеренә төшөрә алмай ҙа ҡуя. Был иптәштең гәзитте уҡыуына шик тә тыуып ҡуйҙы хатта. Аҙаҡ ҡына башыма барып етте: был танышым ысынлап та сайт аша гәзитебеҙҙе уҡыйҙыр, әммә уҡығандары хәтерендә ҡалмайҙыр. Интернет аша уҡығандар хәтергә уйыла һалып бармай икәнен үҙемдән дә беләм бит...**

# АҠ ҠАҒЫҘҘАҒЫ ХӘРЕФТӘРҘӘН...

## уй һәм аҡыл тирәйек

Яныраҡ ҡына күҙгә салынды был мәғлүмәт: немец геронтология һәм гериатрия йәмғиәте ғалимдары йәшлекте, хәтерҙе һәм теүәл аҡылды һаҡлар өсөн көн дә... бер генә бит булһа ла китап уҡырға кәрәк, ти. Ғалимдар аңлатыуынса, китап уҡыу мәлендә организмдағы ике нейрон араһында, йә нейрон менән икенсе бер күҙәнәк араһында бәйләнеш барлыҡҡа килә, бына шул бәйләнеш кешенең хәтере яҡшырыуға, башты эшләтеүгә, хатта йәш көйөнсә һаҡланыуға булышлыҡ итә икән. Кеше китап уҡығанда әҫәрҙәге ваҡиғалар, геройҙар өсөн борсола, шатлана, шул ваҡытта мейе әүҙемлеге күтәрелә. Йәғни, китап уҡығанда беҙҙең мейе лә, тойғолар сығанағы булған йөрәк тә күнекмәләр яһай булып сыға.

Был мәғлүмәт элек-электән таныш, әлбиттә. Әммә ул китап уҡыуҙың әһәмиәте тураһында ҡайта-ҡайта уйланырға, һығымталар яһарға мәжбүр итә. Ә һығымталар шундай: аҡ ҡағыҙ битендә яҙылған фекер аша уйҙарға, хыялдарға, тормош асылына, төрлө фәлсәфәүи төшөнсәләргә, рухиәткә юл асыла. Артабан ошо юлдан бара-бара бик күп нәмәләргә төшөнәһең, һорауҙарға яуап табаһың. Камиллаша бараһың. Ә камиллыҡтың сиге юҡ. Уйҙың да сиге юҡ. Әммә беҙ бөгөн үҙ-үҙебеҙҙе уй уйлауҙа, тимәк, камиллыҡта сикләйбеҙ. Сөнки уй һәм камиллыҡ сығанағы булған аҡ ҡағыҙҙы ҡулға бик һирәк алабыҙ. Телевидение, интернет бар бит, тиерһегеҙ. Ышанығыҙ, улар аҡ ҡағыҙҙан уҡыу һөҙөмтәһен бирә алмай. Сөнки улар һине фекерләргә мәжбүр итмәй. Фекерҙе үлтерә хатта. Бар мәғлүмәт "тәрилкәгә һалып", әҙер көйө килтерелә. Күҙҙәрең күрә, әммә мәғлүмәтте мейегә, уйға, хәтергә индермәйһең, ул шунда уҡ онотола. Ә күҙҙәр аҡ ҡағыҙ өҫтөндә йүгергәндә мәғлүмәт һин, ваҡиға, фекер, хәҡиҡәт, төшөнсә, тарих булып мейегә оҙаҡҡа һеңешә.

Бер инәйҙе беләм инем. Ҡулынан китап төшмәне уның. Хатта ауырып китеп, инде ҡабат аяҡҡа баҫа алмаҫ хәлдә булғанда, үлем түшәгендә ятҡанда ла китаптан айырылманы. Туҡһан йәштән уҙғайны ошо саҡта. Уның күҙҙәрендәге осҡондо, йөҙөнөң яҡтылығын күрһәгеҙ ине! Ауыҙынан зарланыу һүҙе лә, ыңғырашыу ҙа ишетелмәне - эргәһендә өйөрөлгән ҡыҙы менән кейәүенә лә, килгән ҡунаҡтарға ла ошо китаптарҙа яҙылғандар, шулай уҡ әллә ҡасан булған ваҡиғалар, тарих тураһында һөйләр ине. Хәтеренең теүәллеге тағы бер һоҡландыра ине...

Ҡулына гәзит-журнал, китап тотоп та ҡарамаған бер танышым бар. Шул тиклем томана, шул тиклем ваҡ, шул тиклем буш һәм вайымһыҙ ул. Уның менән бер нәмә тураһында ла һөйләшеп булмай. Хатта уны күреү менән эргәһенән ҡасыу теләге тыуа. Һаумы-иҫәнме, тип әйтер өсөн генә тотҡарланып ҡалаһың да, тиҙерәк ситкә китергә тырышаһың...

Хәйер, хәҙер күптәр ошо танышым хәленә ҡалып бара бит: уҡымайҙар. Элек һәр өйҙә гәзит-журнал алдыра торғайнылар. Ҡапҡаһы төбөнә почтальон туҡтамаған өй, моғайын да, ғәҙәттән тыш хәл һымаҡ ҡабул ителгәндер ауылдарҙа. Ҡала йорттары подъездарына ла һәр фатирҙың почта йәшниге юҡҡа ғына ҡуйылмағандыр. Бөгөн ул йәшниктәр бөтөнләй буш тиерлек. Ҡайһылыр бер мәлдә һәр йортҡа гәзит-журналдар алдырыу кеүек матур ғәҙәт юҡҡа сыҡты. Уның менән бергә... Әйҙәгеҙ, уйлап ҡарайыҡ әле, ошо ғәҙәттәр менән тағы ниндәй ҡиммәттәребеҙ юҡҡа сыҡты икән?

Беренсенән, ваҡытты файҙалы итеп үткәреү ғәҙәтен онота барабыҙ икән. Мәҫәлән, телевизор төймәләрен алмаштилмәш баҫҡылап, көндәр буйы диванда аунап ятыу - заяға үткән ваҡыт бит инде ул. Ә компьютерҙа уйын уйнау?..

Икенсенән, аҡ ҡағыҙҙан айырылып, фекерләү ҡеүәһен торған һайын нығыраҡ юғалта барабыҙ. Шуға өҫтәп, уйлана, аҡыллы һығымталар яһау ҡеүәһен дә. Бәй, кеше асылының нигеҙен тәшкил иткән ҡиммәттәр китә икән дә беҙҙе ҡалдырып, һиҙәһегеҙме? Ә беҙ "Ниңә кеше үҙ яҙмышын үҙ ҡулына алырға ашыҡмай, ниңә ошо ҡатмарлы заман һынауҙары алдында ҡаушап ҡалдыҡ?" тип баш ватҡан булабыҙ. Уның сәбәбе шунда, уҡымауҙа ла баһа! Уҡыу аша фекерләргә өйрәнгән кеше мотлаҡ ул һорауҙарға яуап табып бөттө һәм тормошон заманға ярашлы итеп ҡороп та ҡуйҙы.

Ошо һығымтамды нығытыр өсөн бер нисә уңышлы кешегә "Уҡыйһыңмы, нимәләр уҡыйһың? тигән һорауҙы бирҙем. Уларҙың барыһы ла бик күп гәзит-журналдар һәм махсус әҙәбиәт уҡыуы тураһында әйтте. Махсус әҙәбиәт, тигәндәй. Уларҙы хәҙер "Аҡыллы китаптар" тип йөрөтәләр. Ете диңгеҙ аръяғындағы авторҙар яҙған уларҙы. Әммә улар яҙған аҡыл тап беҙҙең өләсәй-олатайҙар һөйләгәнсә: ыңғай уйҙа йөрө, изгелекле, игелекле бул, тормошҡа ышаныс, өмөт менән баҡ, алдыңа маҡсаттар ҡуй һәм шуға ынтыл, кеше еңмәҫтәй ауырлыҡтар ҙа, кәртәләр ҙә юҡ...

**Бынаһы ла ғалимдар һығымтаһы: беҙҙең асылыбыҙ дүрт үлсәмдән - тән, аҡыл, йөрәк һәм рухтан тора, ти улар. Ошо дүртәүҙе уятып, беҙ бер бөтөнгә әйләнәбеҙ. Ә уларҙы ана шул китаптан, гәзиттән уҡылған аҡыл аша ғына уятып була. Уҡығыҙ, мөхтәрәм милләттәштәр. Туған телебеҙҙә күпме китаптар, күпме гәзит-журналдар нәшер ителә. Тик улар бөгөн һеҙҙең иғтибарҙан ситтә.**

**"Киске Өфө"нө лә уҡығыҙ. Һәр хәлдә, "Киске Өфө" аҙналығы биттәрендәге сығыштар ярҙамында һеҙ үҙегеҙгә кәрәкле мәғлүмәтте генә түгел, ә... юғалта яҙған асылығыҙҙы асырһығыҙ, рухығыҙҙы уятырһығыҙ, сәмегеҙҙе тоҡандырып ебәрерһегеҙ. Уҡығыҙ!**

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

*КЕМ АЛЫҠ!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



Федоровка районының башҡорт теле уҡытыусылары.

**2011 йылдың икенсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу бара. Май айында гәзитебеҙгә яҙылыу тураһындағы квитанцияларын редакцияға ебәреүселәргә башҡорт телендәге 5 “Ҡөрьән -Кәрим” китабы вәғәҙә итәбеҙ.**

**Әйткәндәй,** кемде был бүләк ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы **тыуған көнө** менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**"Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы ла дауам итә.** Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

**Шулай итеп,** 2011 йылдың икенсе ярты йыллығына яҙылыу өсөн хаҡтар түбәндәгесә: 50665 индекслыһына **340 һум 92 тингә**, 50673 индекслыһына (юридик шәхестәр өсөн) **370 һум 92 тингә** яҙыла алаһығыҙ.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Республика йортонда параолимпиадасылар менән осрашты һәм уларҙы һуңғы донъя чемпионатында яулаған уңыштары менән ҡотланы. Ә уңыштар шундай: 33 алтын, 17 көмөш миҙал.

✓Өфөнөң Конгресс-холында "Ҙур химия" халыҡ-ара форумы башланды. Форумда РФ Хөкүмәте ағзалары, төбәк хакимиәттәре һәм министрлыҡтары, алдынғы фәнни тармаҡ структуралары етәкселеге, Рәсәй, Ҡаҙағстан, Швейцария, Германия, Финляндия һәм башҡа илдәрҙән химия һәм нефть химияһы тармағының 465 компанияһы етәксеһе ҡатнаша. Был сара фекер алышыу урыны ғына түгел, һөҙөмтәле ҡарараҙар ҡабул итеү майҙансығы ла булырға тейеш, тип көтөлә.

✓Бр Дәүләт Йыйылышы-Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев бойороғо менән Башҡортостан Республикаһында урындағы үҙидараны өйрәнеү буйынса депутаттар эш төркөмө ойошторолдо. 10 июнгә тиклем Урындағы үҙидара һәм йәмәғәт берекмәләре буйынса комитет ағзалары ингән эш төркөмдәре Әбйәлил, Ауырғазы, Ишембай райондарында, Сибай һәм Ишембай ҡалаларында буласаҡ.

✓Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең ултырышы булып үтте. Уның эшендә БР Президенты ла ҡатнашты. Ултырышта Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәгенә яңы етәксе һайланды. Хәҙер был вазифаны Усеин Джемилев башҡарасаҡ.

✓Өфөлә нефть-газ форумы һәм "Газ. Нефть. Технологиялар -2011" XIX Халыҡ-ара күргәҙмәһе эшләй. Унда Рәсәйҙең 35 төбәгенән, сит илдәрҙән 360-тан ашыу ҡатнашыусы экспозицияларын ҡуйҙы. Шулай уҡ күргәҙмәлә республикабыҙҙан 100-ләп фирма һәм компания ла ҡатнаша.

✓Июнь башынан республикала юлдарҙы төҙөкләндереү эштәре башлана. М-7 "Волга" юлында ремонт 1188-се км-ҙан 1271 км-ға тиклем үтәсәк. Төп эштәр август аҙағына тиклем бөтөрөлөргә тейеш. 1218-1229-сы км-ҙа капиталь ремонт эшләү ҡарала. Ул октябрь аҙағына тиклем дауам итәсәк. М-5 "Урал", Р-240 "Өфө-Ырымбур" юлы ла ремонтланасаҡ. Ремонт ваҡытында был юлдарҙың тиҙлеге сикләнәсәк.

✓ ***Бында ла ҡоштар миҫалындағы кеүек Бөйөк затҡа тоғролоҡ хаҡында һүҙ бара. Бары тик дини юлда булып, Аллаһы Тәғәләгә табан барһаҡ ҡына беҙ ахырызаман афәтенән ҡотола аласаҡбыҙ.***



МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ҠОШ АУЛАҒАН ЙӘЛСЕМӘҪ...

**Ысынлап та, ни өсөн ҡош аулау кешене бөлгөнлөккә төшөрөүсе тыйылған ғәмәл һаналған һәм һанала һуң? Халыҡ тормошондағы тыйыуҙарға бәйле был хаҡта мәҡәл бар икән, тимәк, уның бик тәрәнгә һалынған мәғәнәһе лә бар. Тағы ла халыҡта "Ҡош ҡош менән аулана" тип тә әйтәләр. Улай булғас, ни өсөн ҡошто ҡош менән аулау рөхсәт ителә һуң? Ошо хаҡта фекер йөрөтәйек.**



Рәфис Батырҡай һүрәте.

Тәүҙә шундай һорауға яуап эҙләйек: ни өсөн Хоҙай ҡоштарҙы ҡанат менән яралтып, уларға һауаға күтәрелеү мөмкинлеге биргән? Ысынлап та, ә ниңә үҙенең иң яҡын заты булған әҙәм балаһынан Хаҡ Тәғәлә быndай ғәмәлде башҡарыу мөмкинлеген йәлләгән? Ғөмүмән, ниңә кәрәк булған һуң ҡоштарға ҡанат? Билдәле, осор өсөн. Ә бит күп кенә йән эйәләре, шул иҫәптән кеше, был ғәмәлде башҡарыуҙан мәхрүм. Улай булғас, ни өсөн Хаҡ Тәғәлә үҙе яралтҡан йән эйәләрен айырып ҡараған, ҡоштарға ғына зәңгәр киңлектәргә күтәрелеү бәхетен бүләк иткән? "Ни өсөн?" тигән һүҙ менән башланған бер нисә һорау барлыҡҡа килде беҙҙең алда.

Әйтергә кәрәк, был һорауҙарға яуапты тәбиғи һәм аныҡ фәндәр юҫығында ғына табыу мөмкин дә түгелдер. Яуапты беҙ дини тәғлимәттән таптыҡ. Уның буйынса, баҡтиһәң, Хоҙайға иң тоғро заттар икән ҡоштар. Улар тәүлегенә 100 мең тапҡыр "Аллаһ" һүҙен ҡабатлап, Хаҡ Тәғәләгә дан йырлап, зекер әйтә икән. Йән эйәләре араһында иң ялҡауы һаналған ишәктәр иһә тәүлегенә 5 мең тапҡыр "Аллаһ" һүҙен ҡабатлай икән. Ә иң аҡыллыһы, иң йөрәклеһе, иң хислеһе, иң аңлыһы һаналған әҙәм балаларының бәғзеһе тәүлегенә генә түгел, хатта үҙ ғүмерендә тик үлер алдынан ғына Хоҙайҙы иҫенә төшөрөүе бар. Бынан ниндәй һығымта яһайбыҙ инде? Тимәк, Хаҡ Тәғәлә ҡоштарға ҡанатты уларҙың үҙенә тоғролоғо өсөн бүләк итеп биргән. Тағы ла урынлы һорау тыуа: ә ни өсөн фәҡәт ҡанат, йәғни осоу мөмкинлеген бүләк иткән? Бында инде яуап та бик ябай: Туфан һыуы ҡалҡып, Ер өҫтөн һыу ҡаплаған саҡта ҡоштар һауаға осоп китеп, ахырызаман һәләкәтенән ҡотола алһын өсөн.

Дәлилдәр килтер, тиһегеҙме? Бар улар. Кәмә яһап, ҡәүемен Туфандан ҡотҡарған Нух бәйғәмбәрҙең тарихын ғына иҫләгеҙ. Унда Нух ниндәй билдәгә ҡарап ҡоро ергә яҡынлаған? Әлбиттә, һауала осоусы ҡоштарға ҡарап. Билдәле булыуынса, Ер шарында нисәмә тапҡыр Туфан һыуы ҡалҡмаһын, һәр осраҡта ла ҡоштар һыу өҫтөндә һерәйеп ҡалған ҡая-таштарға барып ҡунып, һыу өҫтөнә ҡалҡып сыҡҡан ризыҡ менән туҡланып, был афәттән ҡотола алған. Әлбиттә, улар быға Уның үҙенә тоғролоғона бүләк булараҡ алған ҡанаты ярҙамында ирешкән. Сөнки ҡоштар Хоҙайға иң тоғро заттар.

Халҡыбыҙҙағы "Ҡош аулаған йәлсемәҫ" тигән әйтем тап ошо сәбәпле әйтелгән дә инде. Тимәк, ҡош аулаған кеше Хоҙайҙың иң яҡын күргән затын үлтереп, гонаһҡа бата һәм бының өсөн язаһын да татый. Беҙгә ҡоштар аулауҙың ярамаған ғәмәл икәнлеге бары тик торналарға һәм аҡҡоштарға һунар итеүҙең тыйылыуына бәйле йола рәүешендә генә килеп еткән. Ә бына "Ҡош аулаған йәлсемәҫ" тигәндә һүҙ бит тик торна йә аҡҡош тураһында ғына бармай, ғөмүмән, ҡоштарға һунар итеүҙең гонаһлы ғәмәл булыуы хаҡында бара. Ә инде "Ҡош ҡош менән аулана" әйтеме ҡоштарға үҙҙәренең заты менән һунар итеп, кешене гонаһтан йолоу маҡсатынан барлыҡҡа килгән ғәмәлгә бәйлелер тип уйларға була.

Тимәк, ҡорҙарға, һуйырҙарға, селдәргә, ғөмүмән, ашарға яраҡлы һәм яраҡһыҙ барлыҡ ҡоштарға ла һунар тыйыла бит. Был хәлде аңлаусы һәм аңлатыусы кеше генә юҡ.

Шулай ҙа мин, мәҫәлән, ошондай ҡанатлы йән эйәләренә һунар итеүсе күп кенә кешеләрҙең ғаиләләренең тарҡалыуына, ғаилә ағзаларының ваҡытынан алда донъя ҡуйыуына йәки башҡа төрлө фажиғәгә дусар булыуына шаһит булғаным бар. Дөрөҫ, беҙ ҡош итенән дә ауыҙ итергә тейешбеҙ. Әммә Хаҡ Тәғәлә был осраҡ өсөн дә беҙҙе ҡайғыртҡан, йәғни беҙгә ризыҡ өсөн йорт ҡаҙҙарын, йорт өйрәктәрен, тауыҡтарҙы, күркәләрҙе һәм бүҙәнәләрҙе бар иткән.

Хаҡ Тәғәлә әҙәм балаһына ҡанат бирмәһә лә, аң, зиһен, тойғо, йөрәк бүләк иткән. Ә бит кеше ошо бүләктәрҙең ҡәҙерен белеп, уларҙы Хоҙайға тоғролоғо ярҙамында үҫтерһә, ул да бит аҡтан-аҡ, пактан-пак булып, ҡанатһыҙ ҙа осоу, һауаға күтәрелеү һәләтенә эйә була ала. Зәйнулла ишан Рәсүлев үҙенең дуҫы Ғатаулла ишанға ҡунаҡҡа барыр булһа, бүләктәре тейәлгән ылауын һәм кешеләрен бер нисә көн алда ебәрер булған. Ғатаулла ишан да дуҫының ярҙамсыларын ҡаршы алырға кешеләрен ебәргән. Бер нисә көн үтеп, ике яҡтың да кешеләре бер урында осрашҡан саҡта әллә ҡасан уҡ был урынға килеп еткән ике дуҫ ишан ағас күләгәһендә әңгәмә ҡороп ултырыр булған. Мөжәүир хәҙрәттең дә бер урындан икенсе урынға тиҙ арала барып етеүе хаҡында хикмәтле хикәйәттәр бихисап.

Ә кеше ни рәүешле шулай күккә күтәрелеү һәләтенә эйә була ала һуң? Әлбиттә, уның уй-ниәттәре яҡты, тойғолары таҙа, башҡарған ғәмәлдәре изге, үҙҙәре Хаҡ Тәғәлә шәфҡәтендә булһа. Бында ла ҡоштар миҫалындағы кеүек Бөйөк затҡа тоғролоҡ хаҡында һүҙ бара. Бары тик дини юлда булып, Аллаһы Тәғәләгә табан барһаҡ ҡына беҙ ахырызаман афәтенән ҡотола аласаҡбыҙ, тигән аңлау ҙа тап ошо тоғролоҡта ята. Тимәк, ҡасандыр әйтелгән "Ҡош аулаған йәлсемәҫ" тигән һүҙҙәр беҙҙе оло бәләләрҙән һаҡлап килеүсе, хәҙерге лөғәткә бороп әйткәндә, милли идеяға торошло иҫкәртеү булып аңлашыла.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

## ЭШЕМДӘ ҠУЛЛАНАМ

"Киске Өфө" гәзитенә яҙылмай ҡалғаным юҡ, уның һәр сығарылышын көтөп алам. Был гәзит кеше күңеленә, рухына яҡын булыуы менән йәлеп итә. Айырыуса халҡыбыҙҙың рухи тамырҙарын, милли ҡиммәттәребеҙҙе барлау, тарихи шәхестәребеҙҙе иҫкә алыу, йолаларыбыҙҙы тергеҙеү кеүек темаларҙы күтәреүе менән ҡиммәт ул. Унда баҫылған ғибрәтле һәм ҡыҙыҡлы мәҡәләләрҙе башҡа сығанаҡтарҙан табыуы мөмкин түгел. "Киске Өфө" үҙ тирәһенә тарихыбыҙҙы яҡшы белгән, киң ҡарашлы, үҙенсәлекле фекер эйәләрен таба һәм туплай белә. Берәү булһа ла, берәгәйле, тигәндәй, ундай авторҙар күп булмаһа ла, киң даирәлә тос фекер йөрөтөүсе шәхестәр улар. Ҡыҫҡаһы, "Киске Өфө"нө уҡып сыҡҡандан һуң йәшәүгә дәрт-дарманым, тыуасаҡ көндәргә ышанысым арта. Ә инде уҡытыусы булараҡ, мин был гәзиттең төпләмәһен алып барам һәм ҡәҙерләп кенә һаҡлайым, сөнки ул дәрестәрҙә файҙаланыу өсөн бына тигән уңышлы ҡулланма.

**Рәүилә НИҒМӘТУЛЛИНА,**
**уҡытыусы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Өфөлә башҡорт йәштәренең яңы ойошмаһын ойоштороу конференцияһы булып үтте. "Маҡсат" тип аталасаҡ был ойошманың маҡсаты - башҡорт йәштәренең милли, мәҙәни, социаль, иҡтисади, сәйәси мәнфәғәттәрен үҫтереүгә, уларҙың гражданлыҡ йәмғиәтен үҫтереүҙә ҡатнашыуына булышлыҡ итеү.

✓ Силәбелә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының күсмә ултырышы үтте. Уның эшендә Свердловск, Ырымбур өлкәләре һәм Пермь крайы башҡорттары ҡоролтайҙары ағзалары ла ҡатнашты. Ултырышта Рәсәй төбәктәрендә йәшәүсе башҡорттарҙың тарихи мираҫы, туған телде һаҡлау һәм үҫтереү, милли мәғариф һәм мәҙәниәт мәсьәләләре тикшерелде. Шулай уҡ Силәбе өлкәһе башҡорттары араһында эшҡыуарлыҡты үҫтереү мәсьәләһенә арналған һөйләшеү ҙә үтте.

✓ 6-8 июндә Өфөлә Ҡала мәҙәниәт һарайында кулинария һәм сервис буйынса ҡала чемпионаты үтә. Маҡсаты - ресторан эше мәҙәниәтен булдырыу, дөйөм туҡланыу хеҙмәте менән таныштырыу, үҙ-ара тәжрибә уртаҡлашыу.

✓ Өфө ҡала округы хакимиәте хеҙмәткәрҙәренән торған шахматсылар командаһы Сочи ҡалаһында Парламенттар һәм хөкүмәттәр, өлкә хакимиәттәре һәм ҡала мэриялары командалары араһында ойошторолған X Халыҡ-ара турнирҙа көс һынашып, тағы ла абсолют еңеүсе булды.

✓ Иглин районының Урман ҡасабаһы эргәһендә урынлашҡан боеприпастар склады шартлау һөҙөмтәһендә ҡасабала ҙур янғын башланды. Халыҡ хәүефһеҙ урынға күсерелде. Янғын менән көрәш дауам итә.

✓ М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры һәм Башҡорт дәүләт университеты тарихта тәү тапҡыр башлап яҙыусы студент, магистрант, аспирант йәштәр һәм 35 йәшкә тиклемге университет хеҙмәткәрҙәре араһында иң яҡшы драма әҫәренә "Өмөтлө ҡәләм - 2011" конкурсы иғлан итте. Сараның төп маҡсаты - драматургтар тәрбиәләү, өмөтлө йәштәргә ярҙам, яңы исемдәр асыу. Конкурсҡа материалдар ошо йылдың сентябрь урталарына тиклем ҡабул ителә. Ике еңеүсе билдәләнәсәк.

✓ Был аҙнала Бөтә Рәсәй Китапханалар көнө байрам ителә. Гәзитебеҙҙең дуҫтары булған бар китапханасыларҙы профессиональ байрамдары менән ихлас ҡотлайбыҙ.

✓ *Икенсе йүнәлеш - һөт етештереүселәргә кредит биреү. Һөт етештереүселәргә миллиард һум аҡса бирелгән беренсе программа, - тине Рөстәм Зәки улы. - Беҙ етештереләсәк һөткә 60 көн алдан түләп ҡуясаҡбыҙ".*



ИҒТИБАР!

# БАЙРАМ КИЛӘ, БАЙРАМ!

## Мәскәүҙәр саҡыра

**11-12 июндә Өфөлә Рәсәй, Салауат Юлаев һәм Ҡала көндәренә арналған байрам тантаналары үтәсәге тураһында хәбәр иткәйнек инде. Уға тиклем, 1 июндә - Халыҡ-ара балаларҙы яҡлау көнөндә лә өфөләләрҙе матур бер байрам тамашалары көтә. Уны Мәскәүҙән килгән ҡунаҡтар, Беренсе канал ТВ-һы бүләк итә.**

Беренсе канал ТВ-һы быйыл ун икенсе йыл рәттән Рәсәй буйлап "Беренсе бул!" тигән мәрхәмәтлек акцияларын үткәрә килә. Быйыл улар акция урыны итеп Өфөнө һайланы. Маҡсаты - Халыҡ-ара балалар көнөндә ауырыу, инвалид, етем, ғөмүмән, ярҙамсыһыҙ һәм ҡараусыһыҙ балаларға ярҙам итеү, уларҙың проблемаларына йәмғәтселектең, власть органдарының иғтибарын йәлеп итеү. Акцияны ойоштороусылар Өфөләге балалар йорттарына, балалар дауаханаларына заманса медицина ҡорамалдары, башҡа төрлө ҡорамалдар, йыһаздар бүләк итмәксе.

Беренсе канал ТВ-һының үҙегеҙ яратҡан популяр алып барыусыларын, Мәскәүҙең эстрада йондоҙҙары сығыштарын күргегеҙ һәм ишеткегеҙ килһә, 1 июндә 12 сәғәттә Салауат Юлаев һәйкәле янындағы майҙанға рәхим итегеҙ - акция сараларын асыу тантанаһы тап шунда үтәсәк.

## "Берҙәмлек" саҡыра

**7 июндән 12 июнгә тиклем Башҡортостанда "Берҙәмлек" милли мәҙәниәттәр фестивале үтәсәк. Уны РФ Мәғариф министрлығы, Рәсәй дәүләт халыҡ ижады йорто, БР Мәғариф министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Әбйәлил, Белорет, Учалы районлары һәм Сибай ҡалаһы хакимиәттәре ойоштора.**

"Берҙәмлек" фестивалендә Италияның "А Пачиандерра Сансустиса" фольклор ансамбле, Төркиәнең "Кечиорен", Һиндостандың Педжаб штатының "Патнала" бейеү ансамблдәре, Сербиянан "Младость" фольклор ансамбле, Әзербайжандан Фикрет Әмиров исемендәге дәүләт бейеү ансамбле, Нигериянан музыкант Боладжи Арио Олубунми Дэвид, Мадагаскарҙан музыкант-перкуссионист Рәриндзатуву Селестин Жульен, Гватемаланан солист-инструменталист Гелмми Отониэль Орозко Годинес, Ҡаҙағстандан Жансай Жумекенова һәм Азамат Мукатовтан торған инструменталь дуэт, Әрмәнстандан солист-вокалист Аршак Алтунян, Башҡортостандан "Арғымаҡ" этнорок төркөмө, Ырымбур өлкәһенән "Яйыҡ" казак йырҙары ансамбле ҡатнашыуы көтөлә. Быйыл был ҙур сара беренсе тапҡыр Әбйәлил, Белорет, Учалы райондарында, Сибай ҡалаһында үтә. Фестиваль барышында "Урыҫ йыры байрамы", кейеҙ байрамы һәм һабантуй үтәсәк.

ТУРА БӘЙЛӘНЕШ



# ФЕРМАЛАР ТЕРГЕҘЕЛҺӘ...

## ауылдар йәшәр һәм йәшәрер

**Үҙенең идара итеү осоро башланғандан алып Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов икенсе тапҡыр телеэфир аша халыҡтың һорауҙарына яуап бирҙе. Ошо ваҡыт эсендә уның исеменә 12 меңдән ашыу мөрәжәғәт килһә, уларҙың күбеһе социаль мәсьәләләргә ҡағылғанын күрәҙәсе булмаһаң да асыҡларға мөмкин. Сөнки бөгөн халыҡтың күпселегенең үҙегенә үткән проблемалар - торлаҡ, эшһеҙлек, түбән эш хаҡы һ.б. Шуға күрә был һорауҙарҙың йыш яңғырауы ла осраҡлы түгел. Әйҙәгеҙ, ике сәғәт барған тура эфирҙа урын алған ошо һәм башҡа төп мәлдәргә ҡыҫҡаса туҡталып үтәйек.**

* * *

"Президент юғары идеалдарға ышанырға тейеш! - тип белдерҙе Рөстәм Хәмитов. - Президент кешеләрҙе ҡыҫымға алмай ғына намыҫлы йәшәүҙең өлгөһө булырға тейеш. Һәм беҙ республикала шундай ышаныс, мәрхәмәт, властың һәм халыҡтың үҙ-ара ихтирамы мөхитен булдырырға тейешбеҙ. Беҙ, бөгөн эшләгән Хөкүмәт, урлашмаясаҡбыҙ. Быны мин ышаныслы әйтә алам. Коррупция өсөн нигеҙ булдырмаясаҡбыҙ".

* * *

Төбәк етәксеһе "Урал" мәрхәмәтлелек фондын республика, Рәсәй Федерацияһы кинлектәрендә генә түгел, тотош донъяла уникаль күренеш тип баһаланы. Апрель айында республика Хөкүмәте һәм Фонд менән килешеү төҙөлгән, эш планы, финанслау йүнәлтелергә тейешле объекттар билдәләнгән һәм улар менән идара итеүҙә мотлаҡ Хөкүмәт ҡатнашырға тейеш, тип белдерҙе дәүләт башлығы. Бөгөн Фондта 63 миллиард һум аҡса тупланған һәм ҡайһы бер кешеләр Фонд менән властың конфронтацияһы тураһында имеш-мимеш таратып, үҙенә сәйәси дивидент йыйырға тырыша, күрәһең. "Ғәмәлдә, проблема юҡ, - тине президент. - Әммә бәгзеләргә тауыш-тартыш булмаһа, тормош күңелһеҙ булып күренә башлай, ахырыһы".

* * *

"Бөгөн республикала йәштәрҙе, ветерандарҙы, ҡораллы бәрелештәрҙә ҡатнашыусыларҙы, төрлө кимәлдәге льготаға эйә булыусыларҙы тәьмин итеү өсөн 4-5 миллион квадрат метр торлаҡ кәрәк. Был исемлектә тәү сиратта ветерандар һәм йәштәр тора. Йәштәр өсөн 2015 йылға тиклем тормошҡа ашырыласаҡ программаға ҡул ҡуйылған да инде".

* * *

Башҡортостан Президенты инвалидтарҙың юл йөрөүен, хәрәкәтен тәьмин итеү мәсьәләләре - пандустар ҡуйыу, йәйәүлеләр йөрөгән ерҙәрҙән бордюрҙарҙы алыу - буйынса шәхсән үҙе шөғөлләнәсәк. Был йәһәттән "Асыҡ мөхит" программаһы әҙерләнә башлаған да инде. Инвалидтар йәмғиәте программаны тормошҡа ашырыу буйынса үҙ ярҙамын күрһәтәсәк, ҡайҙа нимә эшләргә кәрәклеге, нимәләргә күҙ йомолоуы тураһында хәбәр итеп торасаҡ.

* * *

2011 йылдың 1 ғинуарынан Башҡортостанда күп - өс йәки унан да күберәк балалары булған ғаиләләргә ярҙам күрһәтеү буйынса етди аҙым яһалды - уларға буш ер биреү тураһында закон ғәмәлгә инде. "Әммә был ҡануниәт тап ошо йылдың беренсе көнөндә донъяға килгән балаларға ғына ҡағыла, мин законға үҙгәреш индереү, йәғни ҡасан тыуыуына ҡарамаҫтан, ғаиләлә өс һәм унын күберәк балалары булған ғаиләләргә бушлай ер биреү мәсьәләһен ҡутәрәсәкмен", - тине Рөстәм Хәмитов тура эфирҙа. Республикала бындай ғаиләләр 34 мең. Шуларҙың өс меңе самаһында балалар һаны бишһән күберәк. 1 июлгә тиклем ер биреү ҡағыҙәләре әҙерләнәсәк.

* * *

"Балалар баҡсалары - йәш әсәләр бирғән иң төп һәм көнүҙәк һорау", - тип билдәләне Рөстәм Хәмитов. Бөгөн республикала 50 мең самаһы бала балалар баҡсаһына йөрөй алмай, сөнки урындар юҡ. Быйылдан был йүнәлеште яйға һалыу буйынса ҙур программа тормошҡа ашырыла башлаясаҡ, ул 27-28 мең урын вәғәҙә итә. Балалар баҡсаларын төҙөүгә өс йылда 9 миллиард һум сығым ҡаралған. Быйыл ғына баш ҡалала яҡынса 15 балалар баҡсаһы 3000 самаһы балаға үҙ ишектәрен асасаҡ.

* * *

Республикала халыҡтың 40 проценты ауылдарҙа йәшәй. Ауыл ерендә эшһеҙлек ҙур, эскелек, үҙ-үҙенә ҡул һалыусылар проблемаһы асыҡ ҡала. "Беҙ уларға эш бирергә бурыслы. Был йәһәттән республикала бер нисә ҡыҙыҡлы программа әҙерләнә. Уларҙың береһе "500 ферма" тип атала. Уға ярашлы, биш йыл эсендә Башҡортостанда 500 ферма ремонтланып, төҙөкләндерелеп сафҡа индерелергә тейеш. Икенсе йүнәлеш - һөт етештереүселәргә кредит биреү. Был Рәсәйҙә Хөкүмәт гарантияһына ярашлы һөт етештереүселәргә миллиард һум аҡса бирелгән беренсе программа, - тине Рөстәм Зәки улы. - Беҙ шәхси хужалыҡтарға алдан кредит бирер, етештереләсәк һөткә 60 көн алдан түләп ҡуясаҡбыҙ". Шулай уҡ ауыл хужалығы техникаһын һатып алыуға субсидия биреү буйынса программа тормошҡа ашырыла. Уға ярашлы 500-ҙән ашыу ҙур техника һатып алынған да инде. Уларҙың хаҡының яртыһын Хөкүмәт түләй, ҡалғанын ауыл халҡы үҙе ҡапларға тейеш.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Президенттың эшмәкәрлегендә төп өҫтөнлөк - кешеләр. Төрлө сәбәптәр арҡаһында беҙҙә халыҡ һәм власть араһында упҡын барлыҡҡа килгән. Ябай халыҡ район, республика кимәлендә власть менән бәйләнеш булдыра алмай, уларҙы ишетмәйҙәр. Хәҙер төп бурыс - ышаныслы мөнәсәбәттәрҙе тергеҙергә. Әлеге ваҡытҡаса халыҡты онотоп, бары тик үҙ мәнфәғәтен ҡайғыртҡан етәкселәрҙән, шул иҫәптән 24 хакимиәт башлығынан, арындыҡ. Был процесс артабан да дауам итәсәк, әммә бөгөн ышаныслы итеп Хөкүмәт һәм муниципаль структураларҙа ниндәйҙер тороҡлолоҡ булдырылыуы тураһында белдерергә мөмкин", - тине Башҡортостан Президенты һорауҙарға яуап биргәнендә. Әлбиттә, властың халыҡҡа яҡынайыуы ыңғай күренеш. Әммә: "Йыл тормай килен маҡтама", - ти халыҡ мәҡәле. Шуға ла әлеге тура эфирҙа яңғыраған яуаптарҙы бөгөнгә комментарийһыҙ ҡалдырып торайыҡ. Һөҙөмтә күренеп, халыҡ рәхмәтле булһа, иң ҙур баһа шул бит ул етәксе өсөн.**

Шәрифә САЛАУАТОВА
әҙерләне.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓28 майҙа баш ҡаланың Сипайлово биҫтәһендә Ҡариҙел ярҙарын таҙартыу өмәһе үтә. Акция сәғәт 11-ҙә башлана.

✓Өфөнөң Ленин районы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында үҙенең 75 йыллығын байрам итте. Ҡотлау һүҙе менән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев сығыш яһаны, алдынғыларға маҡтау ҡағыҙҙары тапшырҙы.

✓Өфөлә "Леруа Мерлен" гипермаркеты асылды. Был француз магазиндары селтәре арзан хаҡтары, сифатлы тауарҙары, бай ассортименты менән йәлеп итә. Сауҙа йортон асыу тантанаһында Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Павел Качкаев, "Леруа Мерлен Көнсығыш" компанияһының генераль директоры Венсен Гюффруа ҡатнашты. Бындағы тауарҙар йорт, дача һәм баҡсаны йыһазландырыу өсөн тәғәйенләнгән. 15 бүлексәлә 41 мең төрлө тауар тәҡдим ителә. Гипермаркетта 225 эш урыны булдырылған. Яҡын арала "Ашан" гипермаркеты һәм "IKEA"ның да асылыуы көтөлә.

✓12 июндәге байрам саралары сиктәрендә беренсе тапҡыр профессиональ ижади коллективтарҙың фестивале үтәсәк. Ленин майҙанында буласаҡ был фестивалдә ҡатнашыуға әле Рәсәйҙең һәм республиканың туғыҙ коллективы ғариза биргән.

✓Республикала полицияға ярҙамға йәштәр дружиналары төҙөргә уйлайҙар. Йәштәр йәмғәт палатаһы ошондай инициатива менән сығыш яһаны һәм БР Дәүләт Йыйылышы Ҡоролтай йортонда ирекле йәштәр дружиналары төҙөүҙе ғәмәлгә ашырыу аспекттары тураһында һөйләшеү үткәрҙе.

✓Өфө урман хужалығы техникумы студенты Альбина Мәрҙәнова "Үҫмер-2011" Бөтә Рәсәй юниорҙар конкурсының финал этабында махсус призға һәм дипломға лайыҡ булған. Альбинаның фәнни эше республиканың тау-урман төбәгендә үҫкән артышты тикшереүгә арналған. Ул бөтә тикшеренеүҙәрен Өфө лимонарийында башҡарған.

✓ *Башҡортостанда, тотош илдәге кеүек үк, ир-егеттәргә ҡарағанда ҡатын-ҡыҙ күберәк. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыуҙар буйынса 1000 ир-егеткә 1136 ҡатын-ҡыҙ тура килә.*



БАШ ҠАЛА ҠУНАҠТАРЫ

# ӨФӨ ҠАЛАҺЫ ТАРТА...

## ихлас халҡы, яҡты йөҙө менән



**18-20 майҙа Өфөлә "Ғаилә һәм демография: милләт-ара татыулыҡты үҫтереүҙең социаль ҡеүәте" тип аталған VIII халыҡ-ара конгресс үтте. Унда илебеҙҙең 50 төбәгенән һәм Бойондороҡһоҙ Дәүләттәр Берләшмәһенән вәкилдәр ҡатнашты. Улар Өфө, Башҡортостан, конгресс һәм уҙған сара хаҡындағы фекерҙәре менән ихлас уртаҡлашты. Һүҙ - ҡунаҡтарға.**

**Цыденжап Батуев, Бүрәт Республикаһының Халыҡ Хуралы рәйесе урынбаҫары:** Өфөлә беренсе тапҡырмын. Килеп күреү теләге шул тиклем көслө ине, хәҙер, Башҡортостандың баш ҡалаһын бер аҙ күргәндән һуң, үҙемдең хыялымда тыуҙырған ҡалаһын мине алдамаҫын, хыялдарым селпәрәмә килеп юҡҡа сыҡмаҫын ышанысլы әйтә алам. Өфө - динамикалы үҫешеүсе ҡала. Йәшеллектең күп булыуы шунда уҡ күҙгә ташлана. Йорттарҙың планировкаһында ла уйлап эшләү, ижади ҡараш күренә.

Программа буйынса беҙгә балаға исем ҡушыу йолаһын күрһәттеләр. Бәләкәй балаларҙың ҡаршы алыуын, уларҙағы ихласлыҡ, сафлыҡты күрһәгеҙ икән! Традицион аш-һыуҙы ауыҙ иттек. Иң ҡыҙыҡлыһы - сара барышында телде белмәһәк тә, бөтөнөһө лә тәржемәһеҙ ҙә аңлашылып торҙо. Сөнки уның асылы һәр халыҡта ла бер үк, оҡшаш. Республикала ғаиләне һаҡлау, демографияны үҫтереү буйынса ҙур эш алып барылғаны һиҙелә. Шундай саралар аша беҙ башҡа диндә булған икенсе милләттәрҙе күрә алмауսанлыҡты, дошманлыҡты тамырынан бөтөрөргә тейешбеҙ.

Президентығыҙ үҙ сығышында, бөгөн башҡа ҡиммәттәр менән ҡыҙыҡһына башланыҡ, тип бик дөрөҫ билдәләне. Асылыбыҙға, совет, Рәсәй йәмғиәтен башҡаларҙан айырып торған интернационализм рухында тәрбиәләүгә ҡайтырға кәрәк.

**Михаил Николаев, "Рәсәй ғаиләһе" Милли йәмғиәт комитеты президенты, Саха (Якут) Республикаһының Дәүләт советнигы:** Өфөлә, Башҡортостанда беренсе тапҡырмын, әммә быға тиклем күп ишетергә тура килде, шуға һеҙҙең турала күп беләм, тиһәм дә була. Бында мәғариф, юғары белем биреү системаһының үҫешкән. Ҡеүәтле нефть химияһы бар, машина эшләү, йыһан караптарына кәрәкле деталдәр етештерәһегеҙ - былар барыһы ла кеше ресурстарын үҫтереү һөҙөмтәләре. Республиканы ошо киттар тотоп тора ла инде. Мине кеше ресурсын үҫтереүгә төп баҫым яһаған халыҡ аппарата ла, һоҡландыра ла. Ҡалғаны ваҡыт ҡулында: аҡыллы кешеләр ижад итә, аҡыллы кешеләр татыу, тыныс йәшәй, аҡыллы кешеләрҙең тормош кимәле лә, сифаты ла һәләте арҡаһында булдырыла. Үкенескә күрә, был сифаттарға эйә һәм эшһөйәр, аҡыллы, халыҡҡа бай субъекттар Рәсәй Федерацияһында күп түгел. Был йәһәттән Башҡортостан яҡшы өлгө күрһәтә.

Өфөлә иң тәү күҙгә ташланғаны - йәшеллек. Ландшафт һоҡланғыс. Ландшафт дизайны буйынса ла эшләһәгеҙ, иҫ киткес ҡала буласаҡ. Йәштәр бик күп, улар матур итеп, милли колоритта кейенгән. Урамда төрлө телдәрҙә һөйләшкәндәре ҡыуаныс, шулай уҡ ике - дәүләт телдәрендәге алтаҡталар ҙа күңелде йыуата.

**Сергей Полетаев, Беларусь Республикаһының "Рәсәй ғаиләһе" йәмғиәте рәйесе:** Көткәнең ысынбарлыҡ менән тап килмәһә, күңелдә ниндәйҙер бушлыҡ барлыҡҡа килә. Кореяға барып ҡайтҡанымда шундай кисереш булғайны, күпкә өмөт иттем, әммә бер аҙ күңелем ҡайтты. Башҡортостанға, Рәсәй Федерацияһының бер субъекты булараҡ, мин уртаса Рәсәй буйынса күҙаллауҙар менән юлландым. Өфөгә килгәс, ҡаланың үҙе, тәбиғәте, кешеләре, ҡаҙанышҡтары бер аҙ аптырашта ҡалдырҙы. Бигерәк тә демография, тыуым, балалар баҡсалары тәҙөлөшө өлкәһендәге уңыштарығыҙға һоҡландым да, ҡыуандым да. Былар барыһы ла ысынбарлыҡтағы тормошто, уның кимәлен, республиканың аяҡҡа баҫыуын һәм үҫешен сағылдыра. Был осраҡта тәьҫораттар көткәндәгегә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ.

Беҙҙә, Белоруссияла ла, бик күп милләт һәм халыҡ вәкилдәре йәшәй, әммә төп массаны - 74 процент - белорустар алып тора. Әммә шуны билдәләп китеү кәрәк, бер генә аҙ һанлы диаспора ла үҙен кәм тоймай. Ивер районында башҡорттар һәм татарҙар йәшәй. Уларҙың мәсеттәре һәм үҙ конфессияларын үҫтереү өсөн барлыҡ шарттары бар.

Башҡортостан Белоруссия өсөн кадрҙар ҙа тәрбиәләй. Заманында власть даирәһендә Башҡортостан егете Урал Латипов Беларусь өсөн күп эшләне, бик етди һәм яуаплы шәхес. Шуға ла белорустарҙың башҡорттар тураһындағы фекере яҡшы.

Уҙған быуаттың 90-сы йылдарындағы аңлашылмаған ваҡиғаларҙан һуң беҙ, ниһәйәт, тамырҙарыбыҙға ҡайтабыҙ. Беҙҙе уртаҡ яҙмыш, уртаҡ проблемалар берләштерә һәм улар милләт айырмай, улар өсөн сиктәр юҡ. Уларҙы хәл итеү юлдарын бергә эҙләргә, бер-беребеҙҙән өйрәнергә тейешбеҙ. Тимәк, бәйләнештәр артабан да дауам итер һәм нығыныр тигән өмөт бар.

**Раиса Гударенко, "Рәсәй ғаиләһе" йәмғиәтенең Ставрополь бүлексәһе етәксеһе:** Тәьҫораттар - иҫ киткес. Минең өсөн Башҡортостанда булыу әйтеп аңлатҡыһыҙ бәхет. Сөнки мин - әсәһе һәм олатаһы яғынан башҡорт булған ейәнсәрҙең өләсәһемен. Уның тыуған ерен күргем, башҡорт ғаиләһенең йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән танышҡым килгәйне. Килеүем, ошоларҙы күреүем менән бәхетлемен. Пленар ултырышта Президентығыҙ Рөстәм Хәмитов, һәр башҡорт үҙенең ете быуынына тиклем шәжәрәһен белергә тейеш, тине. Хәҙер миндә шундай теләк тыуҙы: ейәнсәремдең ете быуынына тиклем нәҫел-нәсәбен барларға. Был эште ҡоҙама йөкмәтермен инде. Сөнки был хәҙер минең өсөн бик мөһим.

Күргәҙмәгә ҡуйылған эштәрҙе ҡарап, үҙемә асыш яһаным: күп нәмәләр уртаҡ, күп милләттәрҙең асылы юғалмаған. Беҙҙәге казак ғаиләһенең традициялары бында ла дауам итә. Һәр милләттең үҙ асылын һаҡлай алғаныгыҙ өсөн рәхмәт.

Ҡаланың матурлығы, кешеләрҙең күңел матурлығы һоҡландыра. Ни тиклем ихтирамлы, иғтибарлы халыҡ. Президентығыҙ ҙа бик оҡшаны. Бындай Президент менән республика бик күп нәмәләр эшләр, тип уйлайым. Сөнки ғаиләгә, әсәләргә, балаларға иғтибар бик ҙур. Башҡортостандың ҡатын-ҡыҙ эшҡыуарҙары ассоциацияһы ла бик уңышлы эшләй, йыл һайын ҙур ҡаҙаныштарға ирешәләр һәм Бөтә Рәсәй конкурсында юғары урындарҙы яулайҙар.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ** яҙып алды.

Аһ-Аһ!

# БАЙМАҠТА ТЫУЫМ АРТА,

## Ә Борайҙа кәмей

**2011 йыл башынан алып ҡына ла республикала йәшәүселәр һаны 2 мендән ашыу кешегә кәмегән. Демография соҡорон "аша һикерҙек" тә һымаҡ ине - республикала һуңғы өс йылда халыҡ һаны 20 мең кешегә артҡайны. 2009-2010 йылдарға халыҡ һанының тәбиғи үҫеше - 5 мең кеше булһа, ағымдағы йыл был ыңғай статистиканы юҡҡа сығармаҡсы, ахыры.** Башстат мәғлүмәттәре буйынса, 2011 йылдан алып ҡына ла беҙҙә халыҡ һаны 2107 кешегә кәмегән. Тыуым күрһәткесе үткән йылдың беренсе кварталы менән сағыштырғанда 2,1 процентҡа кәмеһә, шул уҡ ваҡытта үлем кимәле 6,1 процентҡа артҡан. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы биргән мәғлүмәттәр күңелгә шом һала: республикала быйылғы тәүге өс ай эсендә сабыйҙар үлеме 3 процентҡа артҡан.

Республиканан ситкә сығып китеүселәр арта. Йыл башынан Башҡортостанға даими йәшәү маҡсатында 6,1 мең кеше килһә, 7,4 мең кеше ситкә сығып киткән.

Әлеге ваҡытта республикала хеҙмәткә һәләтле йәштәгеләр (16-54 йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар һәм 16-59 йәштәге ир-егеттәр) һаны 60 проценттан саҡ ҡына артыҡ тәшкил итә. Һуңғы йылда уларҙың һаны 14 мең кешегә кәмегән. " 2013 йылда эшләп йөрөүсе бөрәү эшләмәгән етәүҙе аҫыраясаҡ", - ти Өфө Хеҙмәт медицинаһы һәм кеше экологияһы ғилми-тикшеренеү институтының бүлек мөдире Эльвира Вәлиева. Ә Башстат етәксеһе Әкрәм Ғәниев әйтеүенсә, 20 йылдан республиканың хеҙмәткә һәләтле һәр мең кешеһенә 900 бала һәм пенсионер тура киләсәк.

Башҡортостанда, тотош илдәге кеүек үк, ир-егеттәргә ҡарағанда ҡатын-ҡыҙ күберәк. Һуңғы халыҡ иҫәбен алыуҙар буйынса 1000 ир-егеткә 1136 ҡатын-ҡыҙ тура килә. Ябай "математика" буйынса бындай тигеҙһеҙлек никахтарға юлды ҡатмарлаштыра. Өҫтәүенә, 15-19 йәшлек ҡыҙҙар ауылды ташлап, ҡалаға китеү яғын ҡарай, ә уларҙың үҫмер тиңдәштәре, ғәҙәттә, ауылда йәшәүҙе хуп күрә.

- Ҡоро статистик мәғлүмәттәр ошо килеп тыуған хәлдең республикала йәшәүселәр өсөн тәүге тапҡыр һәм айырыуса ҡабаттан никахҡа инеү ихтималлығын кәметкә, - тиҙәр Башстатта.

Улар билдәләүенсә, ил төбәктәре буйынса тыуым күрһәткестәрендә ныҡ айырмалыҡтар бар. Әгәр Чечня менән Ингушетияла 1000 кешегә 27 бала тыуһа, Тула йәки Псковта был күрһәткес өс тапҡырға кәм (бында мең кешегә 9 сабый тура килә). Башҡортостанда әлеге ваҡытта 1000 кешегә 13 бала тура килә.

**Әйткәндәй, халыҡтың тәбиғи артыуы буйынса республикабыҙҙың Борай һәм Балтас райондарында, Күмертау һәм Салауат ҡалаларында эштәр бик насар тора. Бөрйән, Әбйәлил һәм Баймаҡ райондарында тыуымдың бер ни тиклем артыуы күҙәтелә.**

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



# ТИРЕГЕҘ МАТУР БУЛҺЫН!

### Алоэнан лосьон

Алоэның 100 грамдан да кәм булмаған 2-3 япрағын ҡырҡып алып, тәрилкәгә һалығыҙ һәм бер нисә көнгә һыуытҡысҡа ҡуйығыҙ. Япраҡтарҙы полиэтиленға төрөргә ярамай. Һәйбәтләп йыуып, 1 литр һалҡын һыуға һалығыҙ һәм бүлмә температураһында 2 сәғәт тотоғоҙ. Аҙаҡтан талғын һына утта 5 минут тирһе ҡайнатып алғас, һыуытып һөҙөгөҙ һәм быяла һауытҡа һалығыҙ. Лосьонды һыуытҡыста һаҡлағыҙ.

### Картуфтан битлек

Бит тиреһе ҡоро булһа, тышы менән бешкән картуфты таҙартып, ҡаймаҡ ҡушып иҙергә лә, таҙартып йыуылған биткә һылап, 15-20 минут торорға. Битлекте йылы һыу менән йыуып төшөрөргә.

Картуф булмаһа, битлекте 2 ҡалаҡ эремсек, 1-әр ҡалаҡ ҡаймаҡ менән бал болғатып эшләһәң дә була. Битлекте 20 минут тотҡас, мамыҡты һөткә манып һөртөп алырға һәм битте боҙ киҫәге менән ышҡып, йәшәртеп ебәрергә. Боҙ эт дегәнәге (череда) үләне төнәтмәһенән яһалһа, бигерәк яҡшы.

### Һоло ононан битлек

2 ҡалаҡ һоло онона (кукуруз оно ла ярай) 1 йомортҡа ағы ҡушып, күпертkәнсе болғатырға ла, биткә ябырға. 15-20 минут үткәс, йылы һөт йәки һыу менән йыуып төшөрөргә. Бит тиреһе йәшәреп, ағарып, таҙарып китер.

### Йомортҡа һарыһынан битлек

Яҙ етеү менән бит тиреһе ҡояшҡа янып ҡарайып китһә, йомортҡаның һарыһын биткә ҡалын итеп һөртөргә һәм ҡатҡансы тоторға. Һабын менән йыуып төшөрөргә. Йомортҡа яңы булһын.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

***✓ Уҡыу йортон быйыл 170 уҡыусы тамамлай. 1-се гимназия-интернат күгек уникаль һәм үҙенсәлекле башҡа мәғариф учреждениеһы юҡ республикала. Алтын һәм көмөш миҙалға дәғүә итеүселәрҙең һаны - 25.***



БЕЛЕМ УСАҒЫ

**Был аҙнала Башҡортостандың төрлө төбәктәрендә мәктәпте тамамлаусы 28 614 - ун беренсе, 44 617 туғыҙынсы синыф уҡыусыһы өсөн һуңғы ҡыңғырау яңғыраны. Өфө мәктәптәрен быйыл 8,9 мең туғыҙынсы синыф уҡыусыһы, 6 мең ун беренсе синыф уҡыусыһы тамамлай. Йорәктәргә бер аҙ һағыш һалған "Һуңғы ҡыңғырау" байрамына баш ҡаланың һәм республиканың алдынғы башҡорт гимназиялары ниндәй уңыштар менән килеүен асыҡлау, уларҙың шатлыҡтарын уртаҡлашыу маҡсатында журналистарыбыҙ ҙа был көндө белем усаҡтарына ашыҡты. Артабан һүҙ - сығарылыш уҡыусылары, уларҙың уҡытыусылары һәм ата-әсәләренә.**

# ЮҒАРЫ ҮРҘӘРГӘ АРТЫЛЫРҒА...

## старт бирелде

### Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты

**Уҡыу йортон быйыл 170 уҡыусы тамамлай. Уҡытыусылар, тәрбиәселәр әйтеүенсә, уларҙың һәр береһе тиерлек үҙен ниндәйҙер өлкәлә танытып өлгөргән. Төрлө кимәлдәге олимпиадаларҙа ҡатнашып, гимназияны тамамламаҫ элек үк юғары уҡыу йорто студенты булыу бәхетенә өлгәшкәндәр ҙә, бейеүселәр ҙә, ҡурайсылар ҙа, көрәшселәр ҙә бар уларҙың араһында. Был йәһәттән 1-се гимназия-интернат күгек уникаль һәм үҙенсәлекле башҡа мәғариф учреждениеһы юҡ республикала. Алтын һәм көмөш миҙалға дәғүә итеүселәрҙең һаны - 25. Был байрам уҡыусылар өсөн генә түгел, ә ата-әсәләр өсөн дә бик мөһим ваҡиға, шуға ла артабан һүҙ - уларға.**

**Хәснә Шәйхетдинова, Силәбе өлкәһе:** Ейәнсәремдең тормошондағы ошо матур тантананы үҙ күҙҙәрем менән күрәйем, тип, мин дә елдереп кенә Өфөгә килеп еттем. Бик теләгәс, Башҡортостанға барып белем алырға тигән теләгенә ҡаршы булмағайныҡ, хәҙер үҙебеҙ шатланып бөтә алмайбыҙ. Гимназиялары бигерәк матур, һәр хеҙмәткәре асыҡ йөҙлө, балалар ҙа итәғәтле, һәр береһе башҡортса иҫәнләшеп үтә. Бала бәләкәйҙән ситтә йөрөһә лә йөрәккә ауыр, бигерәк тә ҡыҙ бала булғас, бер аҙ хәүефләнгәйнем дә. Ҡыҙ баланы ҡырҡ урындан тыйып үҫтер, тигән боронғолар, атай-әсәй йыраҡ, тейешенсә тәрбиә ала алырмы икән, тип тә борсолғайным. Әммә был гимназияла бар балалар оло бер ғаилә булып йәшәй, береһе өсөн береһе өҙөлөп тора. Үҙендәге үлтермәй, тип тә бушҡа әйтмәйҙәрҙер, үҙ милләте араһында арҡа нығытты, үҙ халҡының йолалары нигеҙендә тәрбиәләнде, иң мөһиме, үҙ туған теленең моңо аҫтында рух алды. Гимназияның уҡытыусылар һәм тәрбиәселәр коллективына, бигерәк тә оло йөрәкле кеше, талантлы ойоштороусы булған гимназия директоры Әлфир Ғайсинға рәхмәтлемен.



Республика башҡорт лицей-интернаты егеттәре.

**Лира Арыҫланбаева, Баймаҡ ҡалаһы:** Улымдың тап ошо гимназия-интернатта белем алыуы менән шул тиклем бәхетлемен. Ишек төбөнән башланған тәртип тә, иғтибарлы уҡытыусылар ҙа, гимназия етәкселегенең балаларға һәм уларҙың ата-әсәләренә булған яҡшы мөнәсәбәте лә уҡыу йортоноң дәрәжәһе тураһында һөйләп тора. Барыһы ла ихлас, барыһы ла үҙ туғаныңдай. Ата-әсәләр йыйылышына килгән һайын ҡыуанып ҡайтып китә торғайным. Бында уҡый башлағас, улым да үҙгәрҙе, бәләкәйҙән бейергә ярата ине, "Аҡйондоҙ" ансамблендә тағы ла оҫтарҙы. Күңеле лә үҫте баламдың, бында Өфөнөң дә, Рәми Ғарипов исемен йөрөткән гимназияның да, уҡытыусы-тәрбиәселәренен дә йоғонтоһо бар.

### Республика башҡорт лицей-интернаты

**2010-2011 уҡыу йылында ун беренсе синыфты 62 уҡыусы тамамлай. Шуларҙың дүртәүһе - алтын, дүртәүһе көмөш миҙалға дәғүә итә.**

**Илнур Сиражетдинов, сығарылыш уҡыусыһы:** Мине атаәсәйем бәләкәй генә көйө (РБЛИ-ға уҡырға 7-се синыфтан алалар - **Ред.**) тыуған йортомдан айырып, лицейға алып килде һәм был ҡарарға улар ҙа, мин дә үкенмәнек. Сөнки лицейҙағы мөхит бик һәйбәт, тәрбиәселәр һәм уҡытыусылар составы көслө һәм ышаныслы. Бында мин бөгөнгө көндә һәр тармаҡта кәрәк булған фәндәр - инглиз телен һәм информатиканы төплө өйрәндем. Шулай уҡ милли көрәш секцияһында шөғөлләнеп, призлы урындар алыуға өлгәштем. Егет кеше аҡыллы ғына түгел, ә физик көскә лә эйә булырға тейеш бит. Артабан яҙмышымды техник һөнәр менән бәйләргә уйлайым.

**Зилә Хөсәйенова, әсә:** Артур улымды 7-се синыфҡа алып килгәс үҙемә лә, улыма ла бик ҡыйын булды, әлбиттә. Уның "Алып ҡайт, әсәй!" тигәненә түҙмәй, Баймаҡ районы Төркмән ауылынан үҙем Өфөгә күстем дә килдем. Был аҙымыма бер ҙә үкенмәйем, сөнки баланың яҡты, ышаныслы киләсәге өсөн ата-әсә яуаплы. Артур ышанысты аҡлап, һәйбәт уҡыны, төрлө олимпиадалар, фәнни конференцияларҙа ҡатнашып, гел генә призлы урындар яулауға өлгәште. Балаларға төплө белем биреү буйынса ла, уларҙы шәхес итеп тәрбиәләнеү яғынан да был лицей шул тиклем ҙур эш башҡара. Рәхмәт коллективҡа.

### Фатима Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы

**Уҡыу йортон быйыл 44 уҡыусы тамамлай. Улар араһында ике уҡыусы - алтын, ике уҡыусы көмөш миҙалға дәғүә итәләр. Көслө спортсылар, сәсәнлек, "Шаяниум", "Шаян уйын" бәйгеләрендә еңеүселәре, республика олимпиадалары призерҙары менән дан тоткан гимназия һәр уҡыусыһы менән, ә һәр уҡыусы үҙенә ҡанат ҡуйған гимназияһы менән хаҡлы рәүештә ғорурлана.**

Быйыл гимназияны мәктәпкәсә йәшенән үк "Сәңгелдәк" тапшырыуының алып барыусыһы булған Данис Ҡолһарин да тамамлай икән. "Гимназия менән хушлашыу һинең өсөн шатлыҡлымы, әллә моңһоумы?" тип һорағас, Данис: "Оло кешеләр күгек, тиҙерәк оло юлға аяҡ баҫҡы килә. Алдыма ҡуйған маҡсаттарҙы, хыялдарҙы атҡарып сығырға ине. Алған белемемде ҡулланып, үҙем теләгән уҡыу йортона уҡырға инеү ваҡытының быһа-быһа килеп етеңе тураһында уйлап, ҡыуанһам да, ун бер йыл буйы бергә уҡыған дуҫтарыма, уҡытыусыларыма нык эҫенгәнлектән, уларҙан айырылғы килмәй. Быныһы минең өсөн бер аҙ моңһоу", - тине.

### Мостай Кәрим исемендәге 158-се башҡорт гимназияһы

**Уҡыу йортон быйыл бөтәһе 45 уҡыусы тамамлай, Шуларҙың 2-һе - алтын, 4-һе көмөш миҙалға дәғүә итә. Сығарылыш синыфтары физика-математика һәм иҡтисади-гуманитар йүнәлештәрҙә уҡыған һәм мәктәптән һуң ҡайҙа барасаҡтарын алдан белеп, маҡсатлы белем алған.**

- Быйылғылар үҙҙәренең тырышлығы, көслө характер үҙенсәлектәре менән айырылып тора, - тине мәктәп директоры Гөлназ Әхмәҙиева. - Улар сәмселдәр, үҙ фекерҙәрен иҫбатлап бәхәсләшергә лә яраталар. Шулай уҡ спортта ла көслөләр. Ғөмүмән, бар яҡтан да килгән, киләсәктә милләтебеҙҙе тағы ла юғарыға күтәрерҙәй балалар сыға мәктәп ишегенән. Уңыштар уларға.

2011-2012 уҡыу йылына 1-се синыфҡа килгән балалар дүрт синыфты тултырып, мәктәп уҡыусылары һаны 900-гә етәсәк, тип көтәбеҙ. Тағы ла бер үҙенсәлек: яңы уҡыу йылынан 10-сы синыф уҡыусылары бөгөнгө күгек ике түгел, ә өс йүнәлеш буйынса уҡый башлаясаҡ. Улар: физика-математика, социаль-гуманитар һәм медицина йүнәлешле синыфтар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был көндө сығарылыш уҡыусылары һауа тултырылған төрлө төҫтәрҙәге шарҙарҙы күккә осорҙо. Заман-ел ҡайһы тарафтарға бороп ҙа, ҡайҙарға илтер уларҙы, билдәһеҙ. Иллә-мәгәр әле һанап үткән абруйлы башҡорт гимназия-лицейҙарҙа төплө белем алған йәштәребеҙ һәр саҡ юғарыға ынтылыр, милләтебеҙҙең лайыҡлы улдары һәм ҡыҙҙары булыр. Шуға ышанып ҡалайыҡ.**



Рәми Ғарипов исемендәге 1-се башҡорт республика гимназия-интернатында сығарылыш тантанаһы.

*ХӘТЕРКИТАП*

# ЯМҒЫР ЕР ЙӘШӘРТЕР,

## фатиха ил йәшәтер

**Беҙҙең бала саҡ үткән быуаттың 50-60-сы йылдарына тура килде. Был саҡта әле ауылдарыбыҙҙан ҡот ҡасып бөтмәгәйне. Абруйлы ғына аҡһаҡалдар, ағинәйҙәр күп ине. Улар, әйтерһең дә, күҙгә күренмәгән еп-йүгәндәр ярҙамында бөтә ауылды ҡулында тотоп тора ине. Әҙәп, әхләк, иман, инсаф, дин тураһында нәсихәттәрҙе беҙ мәктәптә түгел, ә тап ана шул ауылдың өлкән быуын вәкилдәре ауыҙынан ишетә инек.**



Үкенескә күрә, миңә өләсәй, ҡартәсәй тәрбиәһе тәтемәне. Атайымдың әсәһе мин тыумаҫ борон уҡ донъянан киткәйне, ә әсәйемдең әсәһе - беҙ уны зәзәй тип йөрөтә инек - мин беренсе класта уҡығанда вафат булды. Әйтеүемсә, ул саҡ ауыл ҡарттары, бигерәк тә изге күңелле, матур әбейҙәр ауыл балаларын күмәкләп тәрбиәләне, тип әйтһәң дә хата булмаҫ. Осраған бер ерҙә улар шаян һәм тәртипһеҙ балаларҙы тыйып, шелтәләп, баҙнатһыҙҙарҙы ҡыйыуыраҡ, сосораҡ булырға дәртләндереп, тыңлаусан, тәртиплеләрҙе маҡтап, яҡыны булмаһа ла, һәр бер балаға мөнәсәбәтен, битараф булмауын белдереп торор ине. Мәктәптә уҡытыусыларҙы тыңлап бармаған шуҡ малайҙар ҙа хатта улар алдында шымып ҡала торғайны.

Беҙҙең ут күрше булып тома һуҡыр Ғәйниямал инәй йәшәне. Мин иҫ белгәнемдән алып уны етәкләп йөрөттөм: ҡунаҡҡа саҡырҙылармы, көтөүҙән мал ҡаршылаймы, йомошҡа сығамы, көйәнтәләп һыуға барамы - уң яғынан һәр саҡ мин атланым, сөнки ҡыҙы Гөлсирә апай эштән ҡайтып инмәй. Шул Ғәйни инәйҙең (исемен ҡыҫҡартып, уны шулай тип йөрөттөләр) иң ныҡ иҫтә ҡалған сифаты - унын бөтә шартына килтереп дин тотоуы ине. Апай өйҙә булмағанда, инәй мине иптәшкә ҡунырға алып инә. Йоҡларға ятҡас, ул миңә һәр төрлө доғалар өйрәтә, йомаҡтар өйә, әкиәт һөйләй. Иртән уяныып китеүгә, мин уны намаҙлығында күрәм.

Күҙҙәре күрмәһә лә инәй донъяһын сынъяһау итеп тота ине: иҙәне һап-һары итеп ҡырып йыуылған була һәр саҡ, мейесе ағартылған, кейем-һалымы таҫлап урҙаға эленгән, урындығына (киң, яҫы һике) һуғылған аламыс, күҙ яуын алырлыҡ ҡорама (сыбатма) юрғандар түшәлгән була ине.

Һыуға барһаҡ, ул Йылайыр ситенә генә килеп ярҙа көтөп тора, ә мин тәрәнерәк кисеп барып, биҙрәләргә һыу алам.

"Үргә ҡаратып, бисмилла итеп ал, ҡулыңдан биҙрәгә һыу таммаһын", - тип өйрәтеп тора инәй.

Ҡулдарынан һуғылған боронғо ҡуш беләҙеген, көмөш балдағын һалманы, хатта сәс үрмесендә лә берике көмөш тәңкә сыңлап торор ине.

Аҙаҡ мин район үҙәгендәге мәктәп-интернатҡа уҡырға киттем, ә инәйҙе ҡыҙы кейәүгә сыҡҡас, сит ауылға күсереп алды. Шунан алып, инәй менән беҙҙең аралар өҙөлдө, уҡып бөткәс тә хәл-әхүәлен белешергә эргәһенә барып сығып булманы. Ә бит хәл белешеү - үҙе ҙур сауап, тиҙәр... Йәл, йәш саҡта шулай күп нәмәне уйлап еткермәйһең икән. Әле үткәндәрҙе иҫкә төшөрһәм, ана шул инәйҙең фатихаһы ла төшкәндер, моғайын, тием, сөнки мәктәпте тамамлап, Өфөгә юғары уҡыу йортона инеп китеүем дә, аҙаҡ күңелем ятҡан эшкә урынлашыуым да, оҙаҡ йылдар һикәлтәһеҙ-ниһеҙ, республикабыҙҙың төп баҫмаларының береһендә бер-бер артлы алышынып торған биш мөхәррир менән дә уртаҡ тел табып, хаҡлы ялға тиклем эшләгән йылдарҙа, әйтерһең дә, кемдер мине ыңғай ғына ҡулымдан етәкләп йөрөттө һымаҡ тойолоп китә. Ә был әлеге Ғәйни инәй фатихаһы булғандыр ҙа, бәлки?..

...Тағы бер инәйҙең фатихаһын миңә тура юл һыҙған кеүек ҡабул итәм хәҙер. Торор ерһеҙ, етем инәй булды ул аңлауымса, мәгәр өҫтө-башын бик күркәм йөрөтөр ине: аҡыҡ, көмөш тәңкәләр менән биҙәлгән боронғоса камзулы, ҡулындағы беләҙек, ҡашлы йөҙөктәре иҫемдә ҡалған. Әкиәт донъяһынан сыҡҡандай, әллә ни төҫлө серле күренә ине ул миңә. Исеме лә хатта тарихҡа бер ҡушыла торғандарҙан, боронғоса ине: Гөлбәзир. Ауылыбыҙҙа ундай исемле башҡа берәй ҡатын-ҡыҙ булманы ла, юҡ та. Етем тигәс тә, әллә улы, әллә берәй яҡын ҡәрҙәше ғаиәһендә йәшәй ине йәшәүен, тик килен тейеш кеше менән араларында тынғылыҡ булманы, шуға күрә күбеһенсә өйҙә тормай, кеше һайын йөрөп ятыр ине әбей. Йәне көйөп, ярһыған саҡтарында шымарып, ялтырап бөткән семәрле таяғына таянып, ете саҡырымдағы Крепостой Йылайырҙа йәшәгән минең Низам ҡартатайға бешә һуғып йәйәү килә лә етә торғайны. Дуҫ һәм серҙәш булды улар. Әмәлгә ҡалғандай, мин дә йыш ҡына ҡартатайымда ҡунаҡлайым. Иртәнге сәйҙе эскәс, ҡартатай (зәзәй үлгәс, ул ҡабат өйләнмәне) ҡулдарын артҡа ҡаушырып, Крепостной урамдарына "обход" яһарға сығып китә, унын менән йәшәгән кесе ҡыҙы Гөльямал апай эштә. Гөлбәзир әбей менән беҙ икәү тора ла ҡалабыҙ өйҙә. Тупһаға сығып ултырабыҙ. Күрәм, Гөлбәзир әбейҙең эсен бушатҡыһы килә, тыңлаусыһы ғына булһын. Шулай итеп, ул миңә бөтмәҫ аһ-зарын түгә, килененән, тағы әллә кемдәрҙән яфа сигеүен, ыҙалап, кәмһетелеп йәшәүе хаҡында һөйләй, илап та ала. Әйткәндәй, мин ул ваҡытта 7-8 йәшлек бала - кемдә ғәйеп икәнен ҡайҙан беләйем инде? Ә әбекәй бер ҙә бирешә торғандарға оҡшамаған ине былай, үҙе лә уҫал ғына күренә.

- Бына шулай эт типкеһендә йөрөйөм инде, балам, күрмәгәнем ҡалманы, - тип илаулай был. Шул саҡ мин әсәйемдән отоп алған бер мәҡәл-әйтем менән:

- Эй, инәй, күргәнгә түҙем бирһен, күрмәгәнгә күрһәтмәһен, - тип йыуатҡан булам уны. Ишетеңкерәмәй ине әбей, шуға ла ошо һөйләмде әллә нисә рәт ҡолағына ҡысҡырырға тура килде, шуға күрә лә иҫемдә нығ ҡалғандыр. Шул саҡ әбейемдең нисек алҡышланыуын күрһәгеҙ ине!

- Эй, балаҡайым, бәләкәй генә булһаң да өлкән кеше һымаҡ әйттең әле! Телеңдән ҡыуан, балам, телеңдән ҡыуан! - тип арҡамдан тупылдатып һөйҙө ул.

Рәхмәт инде Гөлбәзир әбейгә лә, яҙмышыма ла: ғүмерем буйы тел байлығы, һүҙ, әсә телебеҙ кеүек хазина менән эш иттем. Ул минең өсөн был донъяла ныҡлыҡ, үҙ-үҙемә ышаныс биреүсе рухи терәк тә, тормошом асылы ла булып әүерелде. Халҡыбыҙ аҡылын кәүҙәләндереүсе туған телем, кәрәк икән, "тимер ишек артындағы" бәғзе берәүҙәр күңеленә алтын асҡыс та, кәрәк икән - терелтеүсе, йәшәүгә көс биреүсе наҙлы моң да, ә ҡайһы саҡ хатта үткер ҡорал да булды минең өсөн.

Әсәй теле, тигәс, ошо рухи хазина ынйыларын түкмәй-сәсмәй балалары күңеленә сәсә алған әсәйемдең һүҙҙәре менән тамамлайым. "Ҡайҙа йөрөһәң дә фатиха алып йөрө, балам. "Ямғыр ер йәшәртер, фатиха ил йәшәтер", - тигән боронғолар, тип ҡабатларға ярата әсәйем әле булһа. Рәхмәт һиңә, әсәй! Балаларыңдың ғына түгел, ейән-ейәнсәрҙәрең күңелен дә үҫтерһен, йәшәртһен һәм йәшәтһен һинең шифалы һүҙҙәрең!

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БАТЫРҘАРҘЫҢ ИСЕМЕН БЕЛ!*



# УРАЛТАУ ОСОРҒАН БӨРКӨТТӘР

## Дауыт Мортазин

Дауыт Лут улы Мортазин 1893 йылда Ырымбур губернаһы Верхнеуральский өйәҙе Күбәләк-Тиләү улысының (хәҙерге Учалы районы) Көсөк ауылында тыуған. Муса Мортазиндың бер туған ҡустыһы.

Башҡортостан Республикаһы ижтимағи ойошмаларҙың үҙәк дәүләт архивында һаҡланған партия билетынан (ЦГАОО РБ. Ф. 22. Оп.2. Д.493.) "Какие местности хорошо знаете?" тип исемләнгән графала "Москва, Петроград, Харьков" тип күрһәткән Дауыт Мортазин. Тимәк, ул 1918 йылда аҡтар яғында башҡорт армияһы сафында хеҙмәт итеп, 1919 йылдың февралендә башҡорт ғәскәрҙәре ҡыҙылдар яғына сыҡҡас, Башҡорт кавалерия дивизияһы составында Көньяҡ фронтта Деникин ғәскәрҙәренә ҡаршы һуғышта ҡатнашҡан булырға тейеш. Башҡорт полктары 1919 йылдың июнендә тап Харьков янында генерал Деникиндың ғәскәренә ҡаршы ҡанлы яуҙарҙа ҡатнаша.

1919 йылдың көҙөндә Башҡорт кавалерия дивизияһы Петроград фронтында Юденичҡа ҡаршы ташлана. 1920 йылдың башында дивизия Новгород губернаһына күсерелеп, һуғыштан иҫән ҡалған яугирҙары бер полкка тупланып, 1920 йылдың майында Польша фронтына Айырым Башҡорт кавалерия бригадаһына оҙатыла.

Дауыт Мортазин тап ошо рәүешле ағаһы Муса Мортазиндың бригадаһына барып ҡушылғандыр, моғайын. Бәлки, Мәскәү, Петроград, Харьков ҡалаларында революцияға тиклемге әрме хеҙмәте ваҡытында булғандыр, тигән дә фараз бар.

Нисек кенә булмаһын, 1920 йылда Дауыт Мортазиндың Польша фронтында Башҡорт кавалерия бригадаһының эскадрон командиры вазифаһында йөрөүе билдәле. Муса Мортазин үҙенең китабында Дауытты яуҙа күрһәткән батырлыҡтары өсөн Ҡыҙыл Байраҡ ордены менән бүләкләнгән, тип яҙа. Әммә "Список лиц, награжденных орденом Красного Знамени РСФСР и почетным революционным оружием" исемле китапта (Мәскәү, 1926) Д.Л.Мортазиндың исеме телгә алынмай. Ләкин был китапта тулы исемлек бирелгән тип әйтеп булмай. Бәлки, исемлеккә инмәй ҡалғандыр.

Дауыт Мортазин фронттан ҡайтҡас, Күбәләк-Тиләү улысы башҡарма комитеты рәйесе булып эшләй. 1921 йылда партия сафтарын таҙартыу эше башлана. Шул йылдың көҙөндә "Комиссия по очистке партии" Дауыт Мортазиндың да эшенә тотона. Уны "организовывал ячейку так называемую кагармановскую, которая находилась в горах, производила грабежи. Состоял в рядах Колчака командиром" тигән һылтау менән партиянан сығаралар. Д.Л.Мортазин 1926 йылда туберкулез менән ауырып вафат була.

**Азат ЯРМУЛЛИН.**

*✓ Тойғоно беренсе урынға ҡуйғанға күрә, айырылышыуҙар һаны ла артты. Ә димләүгә килгәндә, ололар ике яҡты ла ентекләп ҡарай, сағыштыра, аҡыл менән эш итә. Шуға күрә йәштәрҙе димләп өйләндереү ышаныслыраҡ.*

# АТА-ӘСӘЙҘӘРҘЕҢ

## үҙ ғаиләбеҙҙе

**(Башы 1-се биттә).**

**▸ Һәр ғаиләнең үҙенең танышыу, ҡауышыу тарихы була. Бер-берегеҙҙе тәү башлап ҡайҙа күрҙегеҙ?**

**Даян:** Беҙҙең танышыу тарихы бик ҡыҙыҡлы. Дөрөҫөн әйткәндә, мин башта икенсе ҡыҙ менән дуҫлашып йөрөй инем. Баймаҡ районына дуҫ егетемдең туйына барғанда 14 йәшлек кенә Лилиәне күрҙем һәм бер күреүҙән ғашиҡ булдым. Ул ваҡытта мин БДПИ-ның тарих факультетында белем алып йөрөгән 25 йәшлек егет инем инде. Туй бөткәндән һуң кире Өфөгә киттем. Дуҫлашып йөрөгән ҡыҙым менән араларҙы өҙөп, Лилиәнең үҫеүен, Өфөгә килеүен көтә башланым. Тормош үҙ юҫығында дауам итте. Танышыуыбыҙға алты йыл үтте тигәндә, Лилиә Өфөгә килде һәм БДПИ-ның психология факультетына уҡырға инде. Бер йыл дуҫлашып йөрөгәндән һуң өйләнешеп тә ҡуйҙыҡ. Быйыл бергә йәшәүебеҙгә һигеҙ йыл тулды. Камила менән Әминә исемле ике ҡыҙ үҫтерәбеҙ.

**Лилиә:** Даян менән тәүге тапҡыр күрешкәндә мин бала ғына инем әле. Ул саҡта унын менән яҙмышымды бәйләрмен, тип башыма ла килтермәгәйнем. 11 класты тамамлағандан һуң Сибай медицина колледжына уҡырға индем. Унда өс йыл белем алғандан һуң Өфөгә уҡырға килдем. Нәҡ шул ваҡытта Даян менән дуҫлаша башланыҡ та инде. Күптәр, үҙеңдән оло кеше менән тормошоңдо бәйләргә ҡурҡманыңмы, тигән һорау бирә. Бәлки, атайҙы иртә юғалтҡанғалыр, бәләкәй саҡтан үҙемә атайым кеүек терәктаяныс булырлыҡ, арҡа терәрлек кеше эҙләнем. Тормош юлымда Даянды осраттым һәм нәҡ уның һаҡлаусым да, яҡлаусым да, терәк-таянысым да булырына ышандым.

**▸ Йәш ғаилә тормошона ике яҡтың да туғандары йоғонто яһамай ҡалмай. Бер-берегеҙҙең туғандарын, яҡындарын нисек ҡабул иттегеҙ?**

**Даян:** Үҙемә килгәндә, иң беренсе ҡәйнәм менән ҡатыным яғынан туғандарға рәхмәтемде белдерер инем. Улар мине шул тиклем йылы ҡабул итте. Ҡәйнештәрҙе лә баштан уҡ ҡаты тоттолар, йәғни уларға, еҙнәй, тип елкәгә менеп ултырырға ирек ҡуйманылар. Күптәр ҡәйнәһе менән һыйыша алмай, ә мин иң беренсе ҡәйнәм менән дуҫлашып алдым. Ҡатынымдың туғандары менән бер ниндәй ҙә аңлашылмаусанлыҡтар булманы, баштан уҡ ниндәй мөнәсәбәттә булһаҡ, әле лә шулайбыҙ. Унын туғандары менән үҙемдең туғандар араһында айырма күрмәйем, ике яҡ та берҙәй яҡын.

**Лилиә:** Мин дә иремдең туғандарын баштан уҡ үҙ туғандарым кеүек ҡабул иттем. Шулай уҡ ҡайным да мине үҙ ҡыҙы кеүек күрҙе. Мин хатта белеп еткермәгән эшемде гел ҡайнымдан һорай торғайным. Уның биргән кәңәштәре һәр ваҡыт дөрөҫ булыр ине. Ҡәйнәм ҡаты ауырыны, беҙ унын менән бер-ике ай ғына йәшәп ҡалдыҡ. Ике яҡтың да туғандары менән матур итеп аралашып йәшәйбеҙ, ҡунаҡҡа саҡырышып, бер-беребеҙгә ярҙам итешеп торабыҙ. Иремдең туғандары менән үҙ туғандарым араһында бер ниндәй ҙә айырма күрмәйем.

**▸ Һеҙҙең ғаилә хаҡында мәҡәлә яҙырға теләүемде белгәс, күптәр: "Бик лайыҡлы ғаилә, улар башҡаларға өлгө булырлыҡ", - тине. Кешеләрҙең ихтирамын шундай юғарылыҡта тотоу нимәнән килә? Һәм һеҙ уға нисек өлгәштегеҙ?**

**Даян:** Бөтә йәштәр ҙә, ғаилә ҡорғас, тыуып үҫкән ғаилә өлгөһөн үҙ ғаиләһенә күсерергә тырыша. Мәҫәлән, мин һәр ваҡыт үҙемдең атайымдан өлгө алам. Беҙ ғаиләлә дүрт малай үҫтек һәм атайым беҙгә бик матур тәрбиә бирҙе. Ул бер ҡасан да теләһә нәмә һөйләмәне. Ҡыҙып киткән саҡтарында ҡатыраҡ ысҡындырып ташлай ҙа, үҙе: "Әйтмәҫ һүҙҙәрҙе әйттерәһегеҙ", - тип аҡланғандай итер ине. Тәмәке тартманы, эш яратты. Иң мөһиме, ул уландарын эшкә, хеҙмәткә генә өйрәтеп ҡалманы, ә еребеҙҙе, халҡыбыҙҙы һаҡлауҙы, милләтебеҙҙе дауам итеүҙе төп бурыс итеп ҡуйҙы. Ә Лилиәнең әсәһе уҡытыусы, ҡыҙына матур тәрбиә биргән. Ошо ике матур ғаиләлә үҫкән ике кешенең тәрбиәһе, өлгөләре бергә ҡушылып, бер бөтөн барлыҡҡа килгәндер.

**Лилиә:** Мин һәр ваҡыт әсәйемдән өлгө алам: бала саҡтан унын атайға булған йомшаҡ, ихлас мөғәмәләһен күреп, аҡыллы һүҙҙәрен, өгөт-нәсихәтен, кәңәштәрен ишетеп үҫтем. Мәҫәлән, ул ҡыҙҙарҙы: "Ҡатын-ҡыҙ бәхете ир-егет ҡулында. Шулай уҡ ҡатын да аҡыллы, зирәк, сабыр булырға тейеш. Бер кеше менән тормошоңдо бәйләгәнһең икән, уның менән йәшәргә тейешһең. Бер ваҡытта ла ишегегеҙҙе мәңгелеккә ябып сығып китмәгеҙ. Ишекте ябырҙан алды, кире инеүегеҙҙе уйлағыҙ", - тип өйрәтә торғайны.

**▸ Психологтар билдәләүенсә, ғаиләнең иң һынылышлы, көсөргәнешле осоро - тәүге 4-5 йыл. Иң күп айырылышыуҙар ошо арауыҡта теркәлгән. Бер ҡараһаң, үтеп сығырға кәрәкле арауыҡ ҡыҫҡа ғына кеүек, әммә эш "арауыҡта" ғына микән?**

**Даян:** Борон бөтә халыҡтарҙа ла димләү тигән йола булған. Минеңсә, йәштәрҙе димләп өйләндереү күпкә дөрөҫөрәк: был осраҡта айырылышыуҙар бөтөнләй булмай, тиерлек. Йәш саҡта мөхәббәт тигән тойғо бик ялҡынлы була һәм йәштәр уйламай эшләй, аҡыл, аң менән түгел, ә тойғо менән хәл итә. Тойғоно беренсе урынға ҡуйғанға күрә, айырылышыуҙар һаны ла артты. Ә димләүгә килгәндә, ололар ике яҡты ла ентекләп ҡарай, сағыштыра, аҡыл менән эш итә. Шуға күрә йәштәрҙе димләп өйләндереү ышаныслыраҡ та, дөрөҫөрәк тә, минеңсә. Бигерәк тә бөгөн күп йәштәр димселәргә, ололарҙың аҡыллы кәңәшенә мохтаж.

Ә психологтарҙың һынап сығарған "арауығына" килгәндә, беҙҙә ундай һынауҙар бөтөнләй булманы. Беҙ, күрәһең, бер-беребеҙгә шул тиклем тап килгәнбеҙҙер. Бәлки, "арауыҡ" һынап ултырырға ваҡытыбыҙ ҙа булмағандыр, сөнки мин көнө буйы эштә булдым, ә Лилиә балаларҙы ҡараны. Дөрөҫ, ғаилә булғас, һауыт-һаба ла шылтырамай тормай. Беҙҙең ғаиләлә ниндәйҙер бәхәсле хәл тыуа ҡалһа, Лилиә өндәшмәй ҙә ҡуя. Ул өндәшмәгәс, мин дә шымам. Һөҙөмтәлә ҙур бәхәскә юл ҡуйылмай. Әгәр ҡатыным миңә ҡаршы килеп өндәшә, ирешә башлаһа, һүҙ артынан һүҙ китеп, бөтөнләй икенсе хәл булыр ине. Ҡыҙған ваҡытта бит кеше уйламағанын да әйтеп ебәрә. Аҙаҡтан үкендерә лә ул, ләкин "әйткән һүҙ - атҡан уҡ", әйтелгәнде кире ҡайтарып булмай.

**Лилиә:** Даян дөрөҫ әйтә, беҙҙең баш күтәрерлек тә ваҡытыбыҙ ҡалмай ине: өйләнешкәс тә тырышып донъя көтә башланыҡ. Үҙем тыуып үҫкән ғаиләлә талаш, ireш, ығы-зығы булманы, шуға күрә үҙемдең ғаилә мөхитенең дә тыныс булыуын теләйем. Тыныс, имен ғаиләлә балалар ҙа психик яҡтан сәләмәт булып үҫә. Аллаға шөкөр, ҡыҙҙарыбыҙ тыныс, һау-сәләмәт булып үҫеп килә.

**Даян:** Ҡыҙҙарыбыҙ ҡайһы ваҡыт төрлө һорауҙар биреп аптыратып та ҡуя. Бер көн: "Башҡалар айырылыша, һеҙ айырылышмайһығыҙмы?" - тип һорайҙар. Күрәһең, балалар менән уйнағанда шундай һүҙ сыҡҡандыр, йә телевизорҙан ишеткәндәрҙер инде. Бәлки, эстән генә атай менән әсәйгә берәй нәмә булып ҡуймаһын, тип ҡайғырып та йөрөгәндәрҙер.

**▸ Йәш ғаиләлә ата-әсәнең балаларға ваҡыты ҡалмауҙан. Ә һеҙ ҡыҙҙарығыҙ менән нинсек аралашаһығыҙ, ниндәй тәрбиә бирәһегеҙ?**

**Даян:** Татыу, һау-сәләмәт ғаиләлә ир менән ҡатын һәр нәмәне кәңәшләшеп эшләргә тейеш, тип уйлайым. Беҙ ҙә һәр эште Лилиә менән кәңәшләшеп эшләйбеҙ. Был айырыуса балаларҙы тәрбиәләгәндә мөһим. Әйтәйек, атай менән әсәй әйткән һүҙ бер булырға тейеш. Мәҫәлән, әсәһе "ярамай" тип әйтте икән, атаһы баланы икенсегә бора алмай. Икең ике төрлө һөйләһәң, бала һис шикһеҙ яҡлау эҙләп, ике арала сабып йөрөйәсәк, йәки атай менән әсәй араһында ниндәйҙер ҡаршылыҡ тыуҙырасаҡ.Шуға күрә беҙҙең беребеҙ нимәлер әйтһә, икенсебеҙ уны ҡеүәтләй, "ярамай" ти икән, тимәк, ярамай. Бер ҡасан да балалар алдында тауыш сығармайбыҙ, бәхәскә кермәйбеҙ.

Эш менән йүгереп йөрөһәм дә, ҡыҙҙарыма мөмкин тиклем ваҡыт бүлергә тырышам. Уларға әкиәт, шиғырҙар ҙа уҡыйым. Улар минең эштән ҡайтыуымды һағынып көтөп ала. Ҡайтҡас та ҡыҙҙарымды ла, ҡатынымды ла һөйөп алам. Минең менән көнө буйы алған тәьҫораттары менән бүлешәләр, атайға сюрприз тип йә һүрәт, йә ҡағыҙ эсенә фантик һалып, бүләк әҙерләп ҡуялар. I класта уҡып йөрөгән өлкән ҡыҙыбыҙҙы иртән мәктәпкә үҙем илтеп ҡуям.

**Лилиә:** Ҡыҙҙарыбыҙҙы үҫтерер, төрлө яҡтан камиллаштырыр өсөн ҡайҙа ғына йөрөтмәйбеҙ. Баланың талантын асыр өсөн төрлө өлкәлә һынап ҡарарға кәрәк, тиҙәр бит. Өсөнсө йыл инде Ф. Ғәскәров исемендәге ансамблдә бейеү менән шөғөлләнәбеҙ, "Тамыр" студияһында, Елена Лоҡманованың моделдәр студияһында, "Латифа" сәнғәт мәктәбендә, Өфө дәүләт сәнғәт училищеһында уҙғарылған мәктәпкәсә йәштәге балаларға музыка дәрестәрендә лә шөғөлләнделәр. Камилала артислыҡ һәләттәре бар. Нимәгә тотонһа ла ауырлыҡ менән булһа ла алдыра. Ә Әминә һүрәт төшөрә, физик күнекмәләр ярата.

**▸ Ҡыҙҙар ата-әсә ҡулында ҡунаҡ ҡына. Әммә улар бар ҡылыҡ-холоҡ сифаттарын ошо ояһында - ата-әсә ҡулында саҡта ала һәм артабан ҙур тормошҡа үҙе менән алып сыға. Ҡыҙҙарығыҙҙы киләсәктә ҡатын, әсәй булырға рухи-әхлаҡи яҡтан әҙерләйһегеҙме, уларҙы киләһе тормошта кәрәк буласаҡ һөнәрҙәргә өйрәтәһегеҙме?**

**Даян:** Ҡыҙ бала ҡасан да булһа кемгәлер ҡатын, кемгәлер әсәй, кемгәлер килен була. Шуға күрә мин ҡатын-ҡыҙ өйҙәге һәр эште эшләй белергә тейеш, тип һанайым. Уның белеме ҡасан да булһа кәрәк буласаҡ. Әммә, минеңсә, ҡатын-ҡыҙҙың төп бурысы яҡшы ҡатын һәм әсәй булыу, ә карьера менән эш бөтөнләй икенсе урында тора. Шуға күрә ҡатыныма ҡыҙҙарыбыҙҙы көндәлек тормошта кәрәк буласаҡ бөтә эшкә лә өйрәтергә ҡушам. Улар белергә тейеш, өйрәнгәндәре үҙҙәре өсөн. Кейәүгә сыҡҡас, ябай ғына эштәрҙе лә белмәй ултырмаһындар, тибеҙ.

**Лилиә:** Мин бер ваҡытта ла туранан-тура: "Хәҙер һеҙ ошоно эшләйһегеҙ", - тип әйтмәйем. Шул уҡ ваҡытта үҙем эшләп йөрөгән ваҡытта килеп ҡушылһалар, ҡамасауламағыҙ, тип ҡыуып та ебәрмәйем. Улар шул процеста үҙҙәре ҡатнаша, эшләшә, өйрәнә. Бәләкәй булһалар ҙа аптырап тормайҙар: эштең рәтен белеп, ваҡытында эшләй ҙә ҡуялар. Иртәнсәк урындарын йыйып китәләр, кейемдәрен кистән аталары менән бергәләп бөкләп һалалар, гөлдәргә һыу ҡоялар, бесәйҙе ҡарайҙар. Ҡайһы ваҡыт иҙән дә йыуалар. Бешеренгәндә, бигерәк тә ҡамыр ризыҡтары әҙерләгәндә, улар төп ярҙамсыларым. Манты бешергәндә мин йәйеп кенә торам, улар тулыһынса үҙҙәре эшләп бөтә.

**Даян:** Һәр бала бәләкәй сағында эште үҙе эшләргә ярата, мәҫәлән, уға кейемен үҙе кейеүе, ҡалаҡты үҙе тотоп ашауы, уйынсыҡтарын йыйыуы ҡыҙыҡ. Әлбиттә, быларҙы бала үҙе эшләһә, ваҡыт күп китә. Шулай ҙа, әгәр бала эшләйем тип тырыша икән, уның теләген һүндермәҫкә, үҙенә эшләргә мөмкинлек бирергә кәрәк. Юғиһә, күп ата-әсә йыш ҡына баланың ҡулынан эште тартып ала, йәнәһе, үҙе тиҙерәк эшләй, йә баланың бысраныуына юл ҡуймай. Беҙ баланың үҙенә эшләргә ирек бирмәй, беренсенән, уның күңелен ҡырабыҙ, икенсенән, ялҡаулыҡҡа өйрәтәбеҙ. Ә беҙ ҡыҙҙарыбыҙҙы нимәлер эшләгеһе килгәндә тыйманыҡ, киреһенсә, ваҡыт күп үтһә лә сабыр итә торғайныҡ. Шуға күрәлер ҙә, бәләкәстәребеҙ әле үк эш эшләргә ашҡынып тора, бигерәк сос үҙҙәре. Икенсенән, эш боҙһалар, уларҙы тәнҡитләмәҫкә тырыштыҡ. Баланы бәләкәй сағынан тыйып үҫтерһәң, ул йә баҙнатһыҙ булып үҫә, йә үҙ-үҙенә бикләнә, төрлө комселектәре барлыҡҡа килә. Шулай ҙа был баланы бөтөнләй тыйырға ярамай,

***✓ Минеңсә, ышаныс - ғаилә бәхетенең нигеҙе. Ғәҙәттә, ғаиләләрҙә ыҙғыш ир менән ҡатындың бер-береһенә юл бирергә теләмәүенән, йә бер-береһенә ышанмауҙан килеп сыға.***

тигәнде аңлатмай. Юғиһә, ҡайһы бер ата-әсә балаһын бөтөнләй тыймай, һөҙөмтәлә бала шаша, тәрбиәһеҙгә әйләнә. Баланы ҡыйыу итеп үҫтерәбеҙ, тип, башҡа милләттең тәрбиә ысулдарын күсереп, беҙ үҙ халҡыбыҙҙың тәрбиәүи ысулдарын юғалтыуыбыҙ мөмкин. Беҙҙең олатай-өләсәйҙәрҙән күсә килгән тәрбиә ысулдары шул тиклем дөрөҫ, бала тәрбиәләгәндә иң беренсе халыҡ педагогикаһын иҫәптән сығармаҫҡа кәрәк.

**Һеҙҙеңсә, ғаиләлә кем баш булырға тейеш? Ғөмүмән, татыу ғаиләлә баш кәрәкме, бәлки, ике яҡтың да йөктө тигеҙ тартыуы мотлаҡтыр?**

**Даян:** Кәңәшле өй тарҡалмаҫ, тиҙәр. Әлбиттә, ғаиләлә ир менән ҡатын һәр эште кәңәшләшеп эшләргә тейеш. Шулай ҙа ғаиләлә баш булырға тейеш һәм был бурыс электән ир-егеткә йөкмәтелгән. Был дөрөҫ тә. Әйтәйек, ниндәйҙер ауыр хәл ваҡытында ир-ат тиҙерәк уйлай, аҡыл менән эш итә. Ә ҡатын-ҡыҙ, нескә зат булараҡ, хис-тойғоға тиҙ бирелә, ҡапыл юғалып ҡалыусан. Аллаһы Тәғәлә ир менән ҡатынға төрлө һәләттәр биргән, улар был һәләттәрҙе урынында һәм дөрөҫ ҡуллана белергә тейеш. Шулай уҡ ғаиләлә атайҙың абруйы һаҡланырға тейеш. Үҙем үҫкән ғаиләлә беҙ хатта атайҙың урынына ултырмай торғайныҡ. Мин ҡатынымдан бер ҡасан да ауыр йөк күтәрттермәйем, үҙ бурыстарымды теүәл үтәйем. Шул уҡ ваҡытта аш-һыуҙы ул яраштырырға тейеш, тип һанайым.

**Лилиә:** Беҙҙең халыҡта электән-электән ғаиләлә ир-егет баш булырға тейеш, тип һаналған. Мәҡәл-әйтемдәр ҙә шуны раҫлай: "Ир - баш, ҡатын - муйын". Әгәр ҙә иреңде хөрмәт итәһең, яратаһың икән, ысынлап та, ниңә уның алдына сығырға? Был бит ғаиләлә ҡатын-ҡыҙҙың бер нәмәгә лә хоҡуғы юҡ, тигәнде аңлатмай. Мин дә, беҙҙең ғаиләлә ирем баш, тип һанайым һәм бер ҡасан да үҙем баш булырға ынтылмайым. Шулай ҙа кәңәштәрем менән иремә һәр ваҡыт терәк-таяныс булырға тырышам. Ул ниндәй генә хәлдә булһа ла, миңә таяна, ышана алырлыҡ булһын.

**Ғаилә бәхетенең бөтөн хикмәте татыулыҡҡа, үҙ-ара аңлашыуға бәйле. Һәр осраҡта татыулыҡты һаҡлау мөһим. Һеҙҙең ғаиләгеҙҙең татыулығы, берҙәмлеге нимәгә нигеҙләнгән?**

**Даян:** Ғаиләбеҙҙең татыулығы, берҙәмлеге иң беренсе мөхәббәткә, бер-беребеҙгә булған хөрмәт-ихтирамға, үҙ-ара аңлашыуға, уртаҡ фекерләүебеҙгә нигеҙләнгән. Минең атайым: "Иң бәхетлеләр - улар бер тапҡыр өйләнешеп, ғүмер буйы татыу йәшәп, икеһе бер көндә үлгәндәр", - тип әйтә торғайны. Шулай уҡ балалар ҙа ир менән ҡатынды бәйләп тора, бер бөтөн итә. Бөгөнгө заманда күп ғаиләләр үҙебеҙ өсөн йәшәйбеҙ, тип, бала тыуҙырыуҙы һуңғы планға ҡуя. Был дөрөҫ түгел. Ғаилә баланан башлана, тиҙәр. Кеше бер ҡасан да үҙе өсөн генә йәшәп бәхетле була алмай. Ҡартайған көндәрендә яңғыҙҙары зарығып ултырған кешеләр ҙә осрағаны бар. Йорттары тулы йыһаз булһа ла, теләгән бөтә нәмәһе булһа ла, яңғыҙлыҡ - бәхетһеҙлек ул. Ә балаһы булған кеше бер ҡасан да яңғыҙ ҡалмай.

**Лилиә:** Минеңсә, ышаныс - ғаилә бәхетенең нигеҙе. Ғәҙәттә, ғаиләләрҙә ыҙғыш ир менән ҡатындың бер-береһенә юл бирергә теләмәүенән, йә бер-береһенә ышанмауҙан килеп сыға. Ысынлап та, ғаиләлә татыу, тыныс мөхит булһын өсөн, иң беренсе ир менән ҡатын үҙ урынын, үҙ бурысын белергә тейеш.

**"Юҡлыҡ талаштыра, барлыҡ яраштыра", тиҙәр. Ә кемделер барлыҡ шаштыра. "Мохтажлыҡта йәшәгәндәр бер-береһенә нығыраҡ ярҙам итә", тиеүселәр ҙә бар. Һеҙҙеңсә, бөгөнгө заман ғаиләһенең матди хәле ниндәй булырға тейеш?**

**Даян:** Минеңсә, кеше һәр ваҡыт етеш йәшәргә һәм шул хәленә риза булырға тейеш. Бер үрҙе яулағандан һуң, шул урында туҡтап ҡалыу дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, машина алғанһың икән, һин уны яңыһына алмаштырырға тырышырға тейешһең. Әгәр кеше алдына маҡсаттар ҡуйып алға ынтылмаһа, тырышмаһа, тормоштоң мәғәнәһе лә юғаласаҡ. Шул уҡ ваҡытта ҡомһоҙлашыуҙан, харам юл менән аҡса эшләүҙән дә ҡасырға кәрәк. Хәлең һәм мөмкинлегең булһа, матди хәлеңде яҡшыртыуҙың бер гонаһы ла юҡ. Ә, киреһенсә, күктән көтөп, алма беш ауыҙыма төш, тип ултырһаң, яҙыҡ булыр.

# Өлгөһөндә...

## ҡорабыҙ



> ***Минеңсә, кеше һәр ваҡыт етеш йәшәргә һәм шул хәленә риза булырға тейеш. Бер үрҙе яулағандан һуң, шул урында туҡтап ҡалыу дөрөҫ түгел. Мәҫәлән, машина алғанһың икән, һин уны яңыһына алмаштырырға тырышырға тейешһең. Әгәр кеше алдына маҡсаттар ҡуйып алға ынтылмаһа, тырышмаһа, тормоштоң мәғәнәһе лә юғаласаҡ. Шул уҡ ваҡытта ҡомһоҙлашыуҙан, харам юл менән аҡса эшләүҙән дә ҡасырға кәрәк. Хәлең һәм мөмкинлегең булһа, матди хәлеңде яҡшыртыуҙың бер гонаһы ла юҡ. Ә, киреһенсә, күктән көтөп, алма беш ауыҙыма төш, тип ултырһаң, яҙыҡ булыр.***

Үҙемә килгәндә, әле институтта уҡып йөрөгәнемдә үк киләсәктә үҙ эшемде асырға кәрәк, тип уйлай торғайным. Бөгөн шәхси эшҡыуарлыҡ менән шөғөлләнәм. Баш ҡалабыҙҙа һатыу нөктәләрем бар, аҙыҡ-түлек менән һатыу итәм. Милләтем алдында бурысымды яҡшы үтәйемдер, тип уйлайым: ғаиләм бар, балалар үҫтерәм, дәүләтебеҙгә хеҙмәт итәм.

**Ә ни өсөн ҡала ерендә ҡалдығыҙ? Ауылда йәшәргә лә мөмкинлегегеҙ булғандыр бит?**

**Даян:** Үҙем Әбйәлил районы Дәүләт ауылынанмын. Минең атайым йәш сағынан ҡалала йәшәргә хыялланған. Тик уға документтарын бирмәгәндәр һәм ул ҡалаға китә алмай, ауылда төпләнеп ҡалған. Атайым беҙҙең ҡалаға китеүебеҙҙе теләне. Шулай ҙа бер шарты булды: "Ҡалаға китегеҙ, ләкин Магнитҡа түгел. Унда һеҙгә телебеҙҙе һаҡлап ҡалыуы ауырға тура киләсәк, балаларығыҙға ла рус мөхите тәьҫир итеүе бар. Баш ҡалаға барып, башҡорттар һанын арттырығыҙ", - тине. Шуға ла йәшәү урыныбыҙ итеп Өфө ҡалаһын һайланыҡ. Атайымдың ышанысын аҡларға тырышып, баш ҡалала лайыҡлы башҡорт ғаиләһе булып йәшәргә, башҡаларға үрнәк булырға тырышабыҙ.

**Лилиә:** Халыҡ әйткәнсә: "Ир ҡайҙа - ҡатын шунда". Ә ысынында миңә Өфө ҡалаһында йәшәүе бик оҡшай. Беҙ шундай матур йәш башҡорт ғаиләләре менән аралашып йәшәйбеҙ. Ҡунаҡҡа саҡырышҡанда табынға үҙебеҙҙең милли ризыҡтарыбыҙҙы әҙерләйбеҙ, байрамдарҙы хәмерһеҙ үткәрәбеҙ. Ғаиләләр араһында балалар ҙа бер-береһе менән башҡортса аралаша. Ял көндәрен матур итеп үткәрәбеҙ, ҡалала уҙғарылған башҡортса мәҙәни сараларҙы ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ. Бер-беребеҙ менән осрашып, аралашып алһаҡ, шул тиклем рәхәт булып ҡала! Киләсәктә баш ҡалабыҙҙа башҡорт рухлы ғаиләләр артһын, сабыйҙар имен булһын, тигән теләктә ҡалам.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙа, әсәһенә ҡарап - ҡыҙын, атаһына ҡарап - улын һайла, тигән әйтем бар. Мөхәмәҙиндар ғаиләһе ошо хәҡиҡәтте үҙ өлгөләре менән раҫлай. Был фекерҙе ҡеүәтләп, ғаилә башлығы ошондай фекер ҙә өҫтәне:" Тормошта яҡшы кешеләрҙең дә балаһына матур тәрбиә бирә алмау миҫалдары бар. Тимәк, улар ҡайҙалыр хата ебәргән. Бәлки, ғаиләһенә, балаларына иғтибарҙы аҙ бүлгәндер. Ҡайҙа ғына эшләмәһен, ниндәй генә урын биләмәһен, ир-егеттең дә, ҡатын-ҡыҙҙың да төп бурысы ғаиләгә ҡайтып ҡала. Кеше ғаиләлә генә бәхетле була ала. Әгәр тәрбиәне атай менән әсәй бирмәй икән, бала үҙенә иғтибарҙы урамда эҙләй башлаясаҡ".**

**Гөлнәзирә АЙЫТБАЕВА**
**яҙып алды.**

***✓ Биҙрәһен ҡуйҙы ла, яр буйындағы үләнгә тәгәрәне. Кемгә биреп ебәрергә уйлай атаһы? Ризалығымды һорамаһалар ҙа, исмаһам, кейәү килә тип аңғартһаларсы. Кем икән кейәү булаһы кеше? Ҡайҙа алып китер уны?***




*...Шәльяулығым йәшел суҡ,*
*Комсомол булһа һөйәбеҙ,*
*Комсомол булмаһа - юҡ...*

Урындыҡта, мейес буйында йәйелгән түшәгендә йоҡлап китә алмай борғаланып ятҡан Зөлхизә, тәҙрәнән ишетелгән йыр тауышына ҡалҡынып, тәҙрәгә күҙ һалмаҡсы булғайны, урындыҡтың икенсе осонда - мөйөштә ятҡан атаһының: "Ят, нимә ҡарайһың башың кәшкәйеп, йөрөйҙәр төн тыныслығын йыртып, иманһыҙҙар," - тигән һүҙҙәрен ишетеү менән ҡорама юрғанын башынан аша тартып бөркәнде лә, кире урынына сумды, әммә урамдағы йәштәр йыры юрған аша ла үтеп инде:

*Йәш ғүмерҙәр ике килмәй,*
*Белегеҙ ҡәҙерҙәрен...*

"Белерһең, бына шулай йәшлегең сәскә атҡан мәлдә ҡыҙыл эңерҙән йоҡлап ятһаң," - тип үрһәләнде Зөлхизә. Атаһы бигерәк ҡаты тота шул уны, исеме сығыуҙан ҡурҡа. Әсәһе иҫән булһа, нисек тә уртаҡ тел табырҙар, башҡа ҡыҙҙар кеүек ул да киске уйынға сығыр ине. "Әсәйең үгәй булһа - атайың еҙнәй була" тип, белеп әйткәндәр инде.

Бигерәк йәшләй үлеп китте шул әсәһе. Дүрт йәше саҡ тулғайны Зөлхизәнең. Бәпесен тыуҙыра алмай яфаланып үлгәнен һуңыраҡ, үҫә төшкәс, күршетирә еңгәй-инәйҙәрҙең һөйләшкәндәрен сала-сарпы ишетеп кенә төшөндө. Ә ул саҡта әбейҙәрҙең йүгерешеп йөрөүен, тулғаҡтан ыҙаланған әсәһен арба тәгәрмәсенә ултыртып әйләндереүен ҡыҙыҡ күреп ҡарап тороуы яҙа-йоҙа ғына хәтерендә ҡалған. Йөклө ҡатын алыҫ сәфәргә юлланған кешене оҙатып, ылауға ултырып киткәнен ҡарап ҡалырға тейеш түгел, юҡһа, оҙатҡан кешеһе сәфәренән әйләнеп ҡайтмайынса сабыйын тыуҙыра алмай, тигән хөрәфәткә таянып, арба тәгәрмәсен сисеп ергә һалып, ҡатынды шуның өҫтөнә ултыртып, тәгәрмәсте кирегә әйләндерәләр, йәнәһе, оҙатҡан кешеһе ҡайта, шунан һуң ғына сабыйы тыуа тип ышанғандар. Зөлхизәнең әсәһе яңыраҡ ҡына ҡәйнешен әрмегә оҙатҡан икән. Әммә тәгәрмәс тә, әбейҙәрҙең башҡа им-томдары ла әсәһен ҡотҡара алманы.

Күп тә тормай, атаһы ауылдарынан алты саҡрымда ятҡан ауылдан икенсе ҡатынға өйләнде, атаһы "Бына ҡыҙым, һиңә әсәй алып ҡайттым", тигәс, әй ҡыуанғайны Зөлхизә. Әсәйҙәр барыһы ла үҙ әсәһе кеүек һәйбәт була тип уйлағандыр инде, тик ҡыуанысы оҙаҡҡа барманы. Үгәй әсәһе атаһы өйҙә булғанда ғына иплe һөйләште, атаһы өйҙән сығып китеү менән күҙҙәрен аҡайтып, екерергә тотона ине.

Әкренләп ҡатын-ҡыҙҙың тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫ көндәлек мәшәҡәттәре барыһы ла Зөлхизәнең сибек иңенә күсте. Һыу ташыу, ҡашығаяҡ, иҙән йыуыу ғына түгел, ҡамыр баҫыу, ҡорот ҡайнатыу кеүек көс һәм таҫыллыҡ талап иткән эштәрҙе лә бик иртә өйрәнде Зөлхизә. Бер-бер артлы тыуған өс һеңлеһе лә унын ҡарамағында. Ун-ун бер йәше тулыуға унын ҡулынан килмәгән эш юҡ ине инде. Ҡамыр баҫһа, табағында тырнаҡ осо ҡәҙәре лә ҡамыры йәбешеп ҡалмай, һалма йәйһә, йәймәһенең йоҡа һәм тигеҙ булыуын күреп, эштән бушамаған ҡыҙҙы йәлләп, күрше ҡатындар: " Ярай, һылыу, сабыр ит, "сабырлыҡтың төбө һары алтын" тигәндәр, эшләгәнең кеше өсөн булһа ла, өйрәнгәнең үҙең өсөн, кейәүгә сығып китһәң, ҡәйнәң маҡтап бөтөрә алмаҫ үҙеңде, эшкә өйрәнгәс, донъя көтөүе лә еңел булыр үҙеңә ",- тип йыуаталар ине.

Эшенә генә түҙер ине лә, аслыҡ һәм үгәй әсәһенең урынһыҙ йәберләүҙәре үҙәгенә үтә. Көнозоно эшләп тә уға ярай алмағас, бәхетһеҙ яҙмышына, ғәҙелһеҙлеккә рәнйеүе йөрәгенә тулышһа, биҙрәләрен ала ла йылға буйына йүгерә ине. Ҡайһы саҡ аулаҡта илап, ҡайһы саҡ йырлап алһа, күңеле бушап ҡалғандай тойола. Йылғаның талғын ғына ағышын ҡарап ултырыу йәненә һиллек бирә, тынысландыра.

Бәләкәйерәк сағында йәй көндәре иртән тора ла, тышҡа сығып, өй артындағы нигеҙ буйына ултыра. Үҙҙәренән өй аша ғына йәшәгән Мәрзиә еңгәйҙең ҡаҙан ҡырған тауышын ишетеү менән шул яҡҡа табан йүгерә.

- Бөгөн күренмәйсе бикәсем, йоҡлап ята микән, тиһәм, килеп еттеңме ни, әйҙә, ултыр, - тип ҡаршылай уны еңгәһе һәм һөт бешергәндә ҡаҙан төбөнә йәбешкән көйөктө ҡырып алып, Зөлхизәнең усына һала. Ҡаҙан янында ятҡан түмәргә ултырып, Зөлхизә оҙонса булып өҙөлгән көйөктәрҙе берәмләп кенә алып, тәмләп ашарға тотона. Ҡайһы саҡта бейеме күрмәгәндә сүмесенә һоҫоп, тәмле еҫ таратып боҫорап ултырған һөттән дә ауыҙ иттерә. Усындағы көйөк валсыҡтарын ауыҙына ҡаплағас, доға ҡылып, битен һыпырып ҡуя ла, өйөнә табан йүгерә. Бала саҡтағы ауырлыҡтарҙың иң үҙәккә үткәне сәстәре арҡаһында булғандыр. Сәсе оҙон, ҡуйы, етмәһә, бөҙрәләнеп тора, тарап үреүе бер бәлә. Үгәй әсәһе унын сәсен ауырттырып тарай, йолҡа-йолҡа үрә, сәстәре услам-услам булып йолҡоноп сыҡҡанда, күҙҙәренән сөбөрләп аҡҡан күҙ йәштәрен күлдәк еңдәре менән алмаш-тилмәш һөртөп, өнөн дә сығармай түҙә ине Зөлхизә.

Иртәнсәк ҡыҙ үгәй әсәһенең һуҡранған тауышынан уянып китте:

-Ул ниндәй бөтмәҫ йоҡолор инде, оялмай, һуйылдай булып, көн яҡтыһында йоҡлап ятсәле. Ҡатын-ҡыҙ ҡояштан алда торорға тейеш, тор, атайың тәкә һуйҙы, эсәктәрен арытырға кәрәк.

Зөлхизә урынын йыйыштырҙы ла, иҙрәп йоҡлап ятҡан һеңлеләренең юрғандарын йүнәтеп ябып, әсәһенең иҫке кәзәкийен эләктереп, соланда таста ултырған эсәк-ҡарынды күтәреп йылғаға йүнәлде.

Төштән һуң, иртәнсәк һуйған һарыҡтың эс майын сөйгә киреп элеп киптереп алғас, ишек алдындағы ҡаҙанға яғып, иретеп, бауырһаҡ бешереп алдылар.

-Ҡаҙандағы ҡалған майҙы табаға һоҫоп ал да, ҡаҙанды йыуып ҡуй, шунан һыуға барып килерһең, - тине соланда булашҡан үгәй әсәһе.

Зөлхизә һыулы биҙрәләрен ҡаҙан янына ҡуйып, көйәнтәһен ситәнгә элде лә, быҫҡыған утты усаҡ эргәһендә ятҡан утын ярҡаһынан бысаҡ менән сыра ярғылып алып, ҡаҙан аҫтындағы көлдө болғата-болғата өрөргә тотондо, ҡабынғас, тиҙәк өҫтәне лә, биҙрәһе төбөндә ҡалған һыуҙы табаҡҡа ҡойоп, үгәй әсәһе сығарып биргән иттәрҙе йыуып, ҡаҙанға төшөрҙө. "Ниңә был тиклем күп бешерәләр икән, ҡунаҡ саҡыралар микән әллә?" - тип уйлап өлгөрҙө.

-Ҡаҙаның ҡайнап сыҡһа, һурпаһын алып, һыуытып, ҡамыр баҫ та, һалма йәйерһең, ондо самалап һалып ултырттым,- тине лә әсәһе урам яҡ ҡапҡаға ыңғайланы.

Һалма йәйеп һалғас, өйҙө йыйыштырып, урындыҡҡа түшәлгән балаҫты, буй юрғандарҙы ҡағып түшәне, мендәрҙәрҙе ҡаҡҡылап, ҡабартып һалды, иҙәнде йыуып алды. Ул арала әсәһенең екеренгәне ишетелде.

-Ҡаҙаның ҡайнамай тоноп ултыра бит, шуны ла ҡарамай, нишләп йөрөйһөң? Һаман әйтеп, өйрәтеп тороу кәрәк, был тиклем дә белекһеҙ булырһың икән,- тип һөйләнә-һөйләнә усаҡ яғына йүнәлде.- Һеңлеләреңдең сәстәрен тарап үр, үҙеңдең дә өҫ-башыңды ҡара, батмусты ла, самауырҙы ла ҡом менән йышып алып ҡайт, кеше килгәндә ялт итеп торһон,- тип өйгә инеп китте.

Ҡайҙан киләләр икән ҡунаҡтар, кемдәр икән, ниңә был тиклем әҙерләнәләр икән? Нимәлер һиҙенгәндәй хафаланды Зөлхизә, ниңәлер, күңелендә тынысլыҡ юҡ. Атаһынан һорап ҡараһа? Ул һарай яғына самауыр ҡайнатырға шаҡмаҡ ҡырҡып ултырған атаһы яғына атланы.

- Атай, әсәйем ҡунаҡтар килә тисе, кемдәр килә ул?

- Ултыр әле, ҡыҙым,- тине атаһы, янындағы түмәргә күрһәтеп.- Ҙурайҙың инде Зөлхизә. - Атаһының шулай йомшаҡ һөйләшеүенә аптырап ҡалды ҡыҙыҡай. -Бөгөн һиңә ҡоҙалар килә, балам, - атаһының тауышы ҡалтырап киткәндәй тойолдо,- һине кейәүгә бирәбеҙ.

- Аһ,- Зөлхизә ҡулдары менән битен ҡаплап иларға тотондо.

- Йәшең еткән, ҡышҡы селлә алдынан ун алтың тула, Алла бойорһа. Урыны һәйбәт, һорашҡанмын...

Һөйләшеү тамам, тигәндәй, атаһы туҡ та туҡ килеп шаҡмаҡтан ҡалған сытырыҡтарҙы сапҡыларға тотондо.

-Зөлхизә, ҡайҙа олаҡтың? Бар, һыуға бар, самауырға һалырлыҡ та һыу юҡ.

Көйәнтәһен һәм биҙрәһен эләктерҙе лә һыу буйына йүгерҙе Зөлхизә. Биҙрәһен ҡуйҙы ла, яр буйындағы үләнгә тәгәрәне. Кемгә биреп ебәрергә уйлай атаһы? Ризалығымды һорамаһалар ҙа, исмаһам, кейәү килә тип аңғартһаларсы. Кем икән кейәү булаһы кеше? Ҡайҙа алып китер уны? Унда ниндәй яҙмыш көтә? Шулай уйлап, тәгәрәп-тәгәрәп иланы Зөлхизә.

-Илама, һылыу, бөтә ҡыҙҙарҙың да яҙмышы шулай инде ул, үҫеп еткәс, бөтөнләй ят ғаиләгә, сит ергә барып донъя көтөү.

Зөлхизә башын күтәреп ҡараны- Мәрзиә еңгәһенең дә күҙҙәрендә йәш күреп, ғәжәпләнеп тороп ултырҙы.

- Өйрәнерһең... Мин дә һеҙҙең ауылға килен булып төшкәндә ун алтыла ғына инем, Төрлө саҡтар булды, ҡатын-ҡыҙ ғына түгел, бар кешеләр ҙә маңлайына яҙғанын күрә инде. Яҙмыштан уҙмыш юҡ. Бындағы тормошоң да бик еңелдән булманы, бәлки, унда бәхетле булырһың, йәнә бөгөн үк алып китмәйҙәр бит, бер йыл, бәлки, ике йыл үтер әле оҙатып алғансы. Кейәү кеше килеп йөрөр, яйлап өйрәнерһең. -Зөлхизә бер аҙ тынысланғандай булды.

Ул һыуҙан ҡайтҡанда ҡунаҡтар килеп, аттарын туғарып, өйгә инеп киткәйне. Асыҡ тәҙрәнән мулланың никах уҡыған тауышы ишетелеп ҡала. Эштәрен тамамлауға, Мәрзиә еңгәһе килеп, әсәһе менән нимәлер һөйләштеләр ҙә, усаҡ янында булышҡан Зөлхизәгә:

- Әйҙә, бикәсем, соланға инеп өҫтөңдө алыштыр ҙа беҙгә барайыҡ, кейәү менән таныштырырмын, - тине.

- Юҡ, еңгә, мин бармайым...

- Бармайынса булмай инде, никах уҡылды, кейәү көтөп ултыра, әйҙә.

- Уй, еңгә, бигерәк оялам, - Зөлхизә илап ебәрҙе.

-Илама, бикәсем, кейәү бала матур ғына күренә, мә, көлдәгенде кей ҙә...

Зөлхизә ҡалтырана-ҡалтырана өҫтөн алыштырып, ҡурҡа-ҡурҡа ғына еңгәһе артынан эйәрҙе. Ул арала күҙ бәйләнеп ҡараңғы төштө.

- Бар, аласыҡҡа инә тор, мин хәҙер, - тип өйгә инеп китте лә еңгәһе, шунда уҡ ят егетте эйәртеп килеп тә сыҡты.

- Әйҙәгеҙ, әйҙә, - тип аласыҡҡа табан атланы. Зөлхизәгә уға буйһоноуҙан башҡа сара ҡалманы.

- Бына, кейәү, кәләшең, бик егәрле, аҡыллы, матур ҡыҙ, тигеҙ ғүмер итегеҙ, аҡ сәсле, һары тешле булғансы бергә йәшәргә насип итһен Хоҙай һеҙгә, - тип, Зөлхизәнең ҡулын егеттең усына һалды ла сығып китте. "Шунда урын йәйгәнмен", тигәне ишетелеп ҡалды тыштан.

Дөм ҡараңғы аласыҡта икәүҙән-икәү тороп ҡалдылар. Оялышынан нишләргә белмәгән ҡыҙ, ҡулын тартып алырға теләгәйне лә, егет кеше ысҡындырманы.

-Ҡурҡма, һылыу, мин кеше ашамайым, - тигән булды кейәү егет ипле генә.

Иртәнсәк яҡтырыр-яҡтырмаҫтан тороп кейенде лә Зөлхизә, сығып китергә уйлағайны, кейәү кеше уянды. Зөлхизә башын эйеп, урындыҡ ситенә ултырҙы. Егет тә, кейенеп, унын ҡаршыһына килеп баҫты.

- Собханалла, бына һин ниндәй икәнһең, минең кәләшем! Мин шаҙра битле, йә ҡылый күҙле булып ҡуймаһын тип ҡурҡҡайным, ә һин һылыуҙың да һылыуы икәнһең, күңелем тынысланды былай булғас,- тине ул ҡыуанып, күҙҙәрен ҡыҙҙың ҡыйылып киткән ҡаштарынан, алһыу йөҙөнән айыра алманы, ҡараштары ҡуйы керпектәре араһына йәшеренгән күҙҙәрен эҙләне, ҡуйы бөҙрә сәстәренән һыйпап, һаҡ ҡына күкрәгенә ҡыҫты. Зөлхизә күҙҙәрен ергә төбәгән килеш ултыра бирҙе, үҙе һиҙҙермәй генә, күҙ ҡыйыйы менән егеткә күҙ һалды: "Былай күрер күҙгә матур күренә, ҡарт та түгел икән..."

Хәлиулла, кейәүҙең исеме шулай икән, килгеләп йөрөнө лә, юл ҡалмаҫ элек тип, көҙгө эштәр тамамланғас, туй үткәреп, ҡырпаҡ ҡарҙа Зөлхизәне оҙатып та алды. Ҡыҙ өсөн бөтөнләй ят, яңы тормош башланды. Ҡайныһы ла, бейеме лә тыныс, күркәм холоҡло кешеләр. Зөлхизәнең Йәүҙәт исемле ете йәшлек ҡәйнеше лә бар. Хәлиулла ла ипле һүҙле, алсаҡ йөҙлө, донъя көтөүгә тырыш кеше булып сыҡты. Тәү күрешкәндән бер-береһен оҡшатҡан йәштәрҙең күңелен мөхәббәт тойғоһо көндән-көн көслөрәк биләне, тормоштарын наҙ, һөйөү хистәре солғаны. Ҡауышыуҙарына йыл үтеүгә, донъяларына ҡот өҫтәп, улдары тыуҙы, атаһының исеменә оҡшатып, Сәхиулла тип исем бирҙеләр.

Шулай бәхеткә сорналып йәшәп ятҡанда фин һуғышы башланып китте. Ауылдаштары менән бергә Хәлиулланы ла һуғышҡа алдылар. Күп тә үтмәй, унын үлем хәбәре килде. Хәлиуллаһының үлеменә ышанманы Зөлхизә, ышанырға

теләмәне. Һуғыш бөткәс тә, иҫән ҡалғандар ҡайтып бөткәс тә, өмөтөн өҙмәне. Ҡайнығы ла йөк башынан ҡолап имгәнеп, ике-өс ай ыҙаланып ятҡандан һуң яҡты донъя менән бәхилләште.

Бер мәл Зөлхизәне ҡайнығының бер туған ҡустығының улы Ильяс һората башланы. Ҡатын ризалыҡ бирмәне. Ильяс тәүәккәлләп, үҙе һөйләшеп ҡарарға булды. Ҡыш ҡараңғы иртә төшә. Зөлхизә ферманан ҡайтып, ишек алдына инеүгә, һарай яғынан кемдер килеп сыҡты.

- Кем унда? Аһ-аһ, Ильяс, нишләп йөрөйһөң ул?

- Һине көтәм, еңгә...

- Әйҙә, өйгә инәйек.

- Юҡ, бында ғына һөйләшәйек.

- Атаҡ, аулаҡта егет менән һөйләшеп торманға мин ҡыҙ кеше түгел дә.

Зөлхизә өйгә ынтылды.

- Тукта әле, еңгә... -Ильяс Зөлхизәнең ҡулына ҡағылды.

- Ебәр, Ильяс, кеше күрер.

- Еңгә, ризалығыңды бир, Сәхиулла ҡустымды үҙ баламдай ҡарармын, үҙ ағайымдың улы бит.

- Ә бейемемде ҡайҙа ҡуйырһың? Уны кем ҡарар? Йәүҙәт ҡәйнешем дә бәләкәй әле, мин уларҙы ташлап китә алмайым. Уларҙың минән башҡа таяныр кешеһе юҡ.

- Ярҙам итермен, ҡарармын уларҙы ла...

- Юҡ,ҡәйнеш, нимәгә һиңә балалы ҡатын, ана, күпме ҡыҙҙар ауылда.

- Еңгә, миңә һин генә кәрәк .

- Юҡ, Ильяс, башҡаса мине ҡарауыллап йөрөмә, минең ғаиләм бар, - тине лә Зөлхизә өйөнә йүгерҙе.

Был хәлдән һуң ике-өс үткәс, Зөлхизә эштән ҡайтып инһә, өйҙә Ильяс бейеме Хәйерниса менән һөйләшеп ултыра. Сәхиулла менән Йәүҙәт тә шунда урала.

- Әйҙә, балам, сисен, бына һине ҡунаҡ көтә,- Хәйерниса әбей яулығын ҡайырып, йөҙөн ҡапланы.

- Нимә килдең, Ильяс, башҡаса килмә, тинем бит мин һиңә.

Зөлхизә бейеме янына ултырып, уның ҡаҡса кәүҙәһен күкрәгенә ҡыҫты. "Илама, бейем, мин һеҙҙе ташлап бер ҡайҙа ла китмәйем. Бар, Ильяс, хәҙер үк сығып кит, башҡаса килеп йөрөмә..."

- Тукта әле, килен, ашыҡма, яйлап кәңәшләшәйек. Ошоға тиклем бер һүҙһеҙ ҡараның, рәхмәт, Хәлиулланың исеменә тап төшөрмәнең, йөҙөмә ҡыҙыллыҡ килтермәнең. Һин әле йәшһең, ғүмер буйы беҙҙе көтөп ултыра алмаҫһың, Ильяс беҙгә ят кеше түгел. - Хәйерниса әбей Ильясҡа табан боролдо.- Бер генә үтенесем бар Ильяс улым һиңә, Сәхиулламды, Хәлиулламдың бер бөртөгөн ҡаҡма, үҙ ҡаның, үҙ һөйәгең, ят бауыр түгел. Килен, ир балаға ир ҡулы кәрәк, Ильяс улымдың кендеген үҙем киҫтем, күҙ алдымда үҫте, яңғыҙ ҡәйнешемдең улы, Унан да уңайлы кеше булмаҫ.

- Еңгә,- Ильяс телгә килде, - үҙем һеҙҙә йәшәр инем, риза булһаң...

-Ҡуйсы, булмаҫты, кеше көлдөрөп. Һин ҡыҙ кешеме әллә? Ильяс Хәйерниса әбейгә килен булып төшкән, тип күҙеңде лә астырмаҫтар.

- Көлһөндәр, көлөр-көлөр ҙә туктарҙар, - тине Ильяс Зөлхизәнең ыҡҡа килә башлауына ҡыуанып.

- Мин Хәйерниса инәйҙе лә, барығыҙҙы ла алып ҡайтыр инем дә, әсәйем риза түгел.

- Апһыныма һүҙ тейҙермәгеҙ, мин дә риза булмаҫ инем өс имгәк эйәртеп килгән киленгә .

- Беҙҙең өсөн үҙ әсәйеңдән баш тартаһыңмы?

- Баш тартмайым да...

- Юҡ, улай булмай инде. Белмәйем, улай бик ныҡышҡас,- Зөлхизә аптырап бейемен ҡараны,- әсәйеңде лә алып кил һуң...

- Килә буламы ул...

- Улайһа, һин дә килеп йөрөмә, әсәһен ташлап сығып киткән кешегә беҙ нисек ышанайыҡ? Ғәйепләмә, Ильяс, үҙ тиңеңде тап, минең башҡа әйтер һүҙем юҡ. - Ильяс ауыр ҡуҙғалып, урынынан торҙо ла, ишекте шарт ябып сығып китте.

Яҡтас та тиҙ генә йоҡлап китә алманы Зөлхизә. Ҡатын-ҡыҙ һөйөү-һөйөлөү өсөн яратылған зат шул. Хатта һине һөйгән кешегә битараф булған хәлдә лә, ҡайҙалыр һине һөйгән, һиңә табынған кеше барлығын белеү йөрәкһетә, күнелде йылыта, ымһындыра. Ильяс иҫенә төшкән һайын Зөлхизәнең күңеле кинәт кенә ҡалын болоттар араһынан йылмайған ҡояштай, бер миҙгелгә генә балҡып китә, уны осраҡкан һайын йәш ҡатындың йөрәге елкенә, ягымлы ҡарашынан юғалып ҡала, шул уҡ ваҡытта Хәлиулла менән йәшәгән бәхетле йылдарын хәтерләп, уға хыянат иткәндәй, күңел ғазабы кисерә, үҙе лә аңлап бөтә алмаған ҡапма-ҡаршылыҡлы тойғолар солғаныш\-ында ҡала.

Иртәнге һауындан ҡайтып, сәй эсергә ултырғайнылар ғына, Ильястың әсәһе Гөлбоҫтан әбей килеп инде. Хәл-әхүәл белешеп, берәр сынаяҡ сәй эстеләр. Бер мәлгә тымып ҡалдылар, һүҙ ялғанманы. Көсөргәнешле тынлыҡты Гөлбоҫтан әбей боҙҙо:

- Хәйерниса еңгә, Зөлхизә килен, аптыраған көндән килдем. Ильясым һеҙгә килеп ҡайтҡандан бирле үҙенә урын тапмай. Тел ҡайырып һүҙ ҡатҡаны юҡ, төнөн дә уфтанып сыға. Үҙем килергә булдым. Атаһы мәрхүмгә оҡшап, ғәрсел, ҡыҙыулығы ла бар. Ят ярлыҡамаҫ, үҙеңдеке үлтермәҫ, уртаҡ тел табырбыҙ, иншалла, тип күҙ терәп килдем әле.

- Мин дә ҡаршы түгел дә ул, килен ни, һеҙҙе ташлап китмәйем, ти ҙә ҡуя бит, беҙ ни Йәүҙәт менән нисек тә үҙебеҙ көн итер инек.

- Зөлхизә килен, Хәйерниса еңгә, бергә-бергә йәшәрбеҙ әле, балаларҙы ла бергәләп ҡарарбыҙ, өйөм тар булһа ла, күңелем киң. Мин ни ике уртала йөрөрмөн, өлкән улым да алыҫ йәшәмәй бит, кире ҡаҡмағыҙ инде.

- Рәхмәт, Гөлбоҫтан килен, әйтеүеңә, мин урынымдан ҡуҙғалмайым, Ильяс менән Зөлхизәгә фатихамды бирәм. Хәлиуллам үҙе ҡайтҡан булһа, ошолай өс тол бисә ҡыуылдашып ултырыр инекме ни, киленемде үҙ баламдай яҡын күрәм, Сәхиуллам менән икеһен йөрәгемдән һурып бирәм, рәнйетә торған булһағыҙ, апһыным тим тормам. Бөртөк кенә ейәнемде артыҡ күреп бирмәйем, атайһыҙ баламды әсәйһеҙ ҙә итәйемме алып ҡалып. - Хәйерниса әбей яулыҡ осо менан күҙҙәрен һөртөп алды.

- Хәйерниса инәй, рәнйеп ҡалма, килеп ярҙам итеп торорбоҙ, үҙең дә килеп йөрөрһөң, Алла бойорһа, ҙур итеп өй һалам, Йәүҙәт менән һине лә, әсәйемде лә алып бергә йәшәрбеҙ,- тине Ильяс Зөлхизә менән Сәхиулланы оҙатып алып ҡайтҡанда.

Ят йортҡа ла, Ильясҡа ла өйрәнеп китеүе еңел булманы Зөлхизәгә. Әммә Ильяс иғтибары һәм һөйөү менән уның күңелен көндән-көн нығыҡ яулай барҙы, айырыуса Сәхиуллаға булған йылы мөнәсәбәте ихтирамын уятты. Биргән вәғәҙәһенә тоғро ҡалып, Хәйерниса әбейгә лә ярҙам итергә өлгөрҙө. Сәхиулланы күтәреп алып барып, Хәйерниса әбейгә индерә лә, үҙе сығып йә ҡар көрәй, йә йылғаға төшөп, мәке уйып, һыуын килтерә, утынын да соланға ташып өйөп ҡуйҙы. Зөлхизә лә бара һалып иҙәндәрен йыуып сыға, керҙәрен йыуып элә. Татыу ғаиләгә бәхет өҫтәп, көҙ етеүгә улдары тыуҙы. Ильяс яңы йортҡа нигеҙ һалды. Тик бөтә уй-хыялдарҙы селпәрәмә килтереп, тағы ла илгә яу ябырылды. Был юлы Германия һуғыш башланы. Ильяс тәүгеләрҙән булып һуғышҡа китте һәм һуғыштың икенсе йылында "ҡара ҡағыҙ" килде.

Зөлхизә тағы ла тол ҡалды. Башҡа ҡатын-ҡыҙҙар менән бергә ферма һыйырҙарын һауып ҡайтҡас, бесән сапты, әҫкерт һалды, ҡыш көндәре үгеҙ егеп, колхоз һыйырҙарына ҡырҙан бесән ташыны, саҡ ҡына буш ваҡыты булһа, балтаһын биленә ҡыҫтырып, Йәүҙәт менән Сәхиулланы эйәртеп, йылға буйына тал ҡырҡырға барҙы. Малайҙар ҡул санаһы менән ҡырҡҡанын өйгә ташыны. Ике өйҙә йылытып тороуы ауырлашҡас, күҙҙәре лә һуҡырайып ҡалған Хәйерниса әбейҙе ай-вайына ҡарамай Зөлхизә үҙҙәренә күсереп алды. Үҙе эштә ваҡытта бәләкәй Айҙар ҙа, Хәйерниса әбей ҙә Гөлбоҫтан бейеме ҡарамағында булды.

Оҙон-оҙаҡҡа һуҙылған һуғыш, ниһайәт, тамамланды. Бәхетле ҡатындарҙың ирҙәре әйләнеп ҡайтты, тик Зөлхизәләрҙең оло ғаиләһенә ҡайтыр кеше юҡ. Бер көн шулай Гөлбоҫтан әбей ҡайҙалыр сығыр киткәйне. Түр башында ултырған Хәйерниса әбей Зөлхизәгә өндәште:

- Килен, ултыр әле эргәмә, бик күптән уйлап йөрөгән бер кәңәшем бар ине,- тине лә үҙе туктап ҡалды. Һүҙен башлай алмай бергилке ултырғас, телгә килде:

- Ни, килен, Йәүҙәт ҡәйнәшеңдең үҫкәнен көт инде...

- Бәй, көтмәй мин ҡайҙа китәйем?

- Юҡ, килен, һин аңламаның, ир булып еткәнен көт, тиеүем. Ир бала тиҙ үк үҫә лә китә ул, ана хәҙер үк ҡул араһына инеп бара. Бер-ике йылдан бынамын тигән ир булыр, Алла бойорһа, йәш айырмаһы йәшәй килә тиңәлә, тигеҙләнә ул.

- Тәүбә тигән, бейем, нимә һөйләйһең һин? Оялмай... Үҙем ҡарап үҫтергән баланы... Кеше ишетмәһен... Ике улығыҙҙың башына еттем бит инде, өсөнсөһөн дә һәләк итәйемме? Бәлки, миңә, мин бәхетһеҙгә өйләнмәһәләр, иҫән ҡайтырҙар ине,- тип илап ебәрҙе Зөлхизә.

-Эй, балаҡайым, миңә еңел тиһеңме был һүҙҙәрҙе әйтеүе. Күпме йоҡоһоҙ төндәр үткәрҙем мин был ҡарарға килгәнсе. Һине лә, балаларҙы ла йәлләп әйтеүем, йә үгәй атай ҡулына ҡалырҙар, йә тырым-тырағай таралашып бөтөрҙәр тип ҡурҡҡандан ғына...

-Күрәһең, миңә ир менән йәшәргә яҙмағандыр. Ә Йәүҙәтте мин үҙемдең улым тип иҫәпләйем, Сәхиулла менән Айҙарға ағай булып, күҙ-ҡолаҡ булып йөрөһә, миңә шул еткән, артығына өмөт итмәйем. Һин дә онот, бейем, был уйынды, Йәүҙәт ишетмәһен, яҙмышыма ризамын, өс улым, ике әсәйем бар.

- Унығына рәхмәт, килен, аҡыллығың шул һин, етеҙ аҡыллылығың.

Әммә беҙ, ҡатындарҙың даланы шул бит: бала табыу, бала бағыу. Әле бит һинең, киленем, бала табыр әмәлең бар. Шул әмәлең бушҡа китмәһен тип кенә әйтеүем...

-Әллә инде, бейем...

Улар етәкләшеп тупһанан төшөүгә Гөлбоҫтан әбей ҙә ҡайтып инде, өсәүләшеп, тупһа янында торған эскәмйәгә теҙелделәр. Ҡояш йылыһына наҙланып, көнгөр-ҡаңғыр һөйләшеп ултырғанда, йүгерешеп малайҙар ҡайтып инде.

-Әсәй, ҡәртәсәй, өләсәй, беҙ үҙебеҙҙең өйҙә барып күрҙек,- тип тәтелдәне бәләкәс Айҙар.

-Ниндәй өйҙө, улым?- Хәйерниса әбей ҡулдарын һуҙып, уны үҙенә тартып, тупылдатып һөйөп алды.

-Тегендәге,- тип ҡулын болғаны малай.

-Мин үҙебеҙҙең өйҙө - Ильяс ағайым һалған нигеҙҙе күрһәттем ҡустыларыма. Унда Йәүҙәт ағайым бүрәнә әрсеп йөрөй...

-Бүрәнә әрсеп?..

Бәләкәс Айҙарҙың был һүҙҙәре Зөлхизәне телһеҙ ҡалдырҙы. Хәйерниса бейеме менән улы Айҙар һөйләшеп ҡуйғандар, тиерһең. Гүйә, улар икеһе лә "Йәүҙәттең үҫкәнен көт" тип ҡабатлаған кеүек тойолдо Зөлхизәгә...

КИТАБЕННАС

# ӨС ЙӨҘ ҘӘ ӨС ХӘҘИС

**Рауил БИКБАЕВ,
Башҡортостандың халыҡ шағиры.**

**202**

Мине, зинһар, хәсрәттәрҙән
Аралай күр, эй Аллаһым,

Эй Аллаһым, ҡурҡаҡлыҡтар
Намыҫымды таламаһын.

Аралай күр рәнйетеүҙән,
Фетнәләрҙән, золомдарҙан.
Аралай күр һаранлыҡтан
Аран тулы малым барҙа,
Әйләндермә хәйерсегә
Һау аяғым-ҡулым барҙа.

Эй, Аллаһым, аралай күр
Хәлһеҙлектән,
Ялҡаулыҡтан.
Ҡарт көнөмдә бер ҡарауһыҙ
Ҡаҡ түшәккә мине йыҡма.

Рәхәттә лә, михнәттә лә
Һыйынамын һиңә бары.
Эй Аллаһым, осҡас йәнем,
Еңеләйтә күр гүр ғазабын.

**203**

Кеше булғас, булһын күркәм,
Күркәмлек сифаты - дүртәү.
Әммә тағы дүрт сифат бар,
Улары - күркәмдән күркәм.

Ирҙең оялсан булыуы
Матур сифат, күркәм бигерәк.
Ҡатын-ҡыҙҙа оялсанлыҡ -
Быныһы тағы ла күркәмлерәк.

Ғәҙеллек ул матур сифат,
Һәр кемгә лә килешә бигерәк.
Батша-әмир ғәҙел булһа,
Быныһы тағы ла күркәмерәк.

Тәүбә итә белеүҙәре
Ҡарттар өсөн күркәм бигерәк.
Йәштәр тәүбә итә икән -
Быныһы тағы ла күркәмерәк.
Байҙар йомарт була икән,
Бик мәслихәт, күркәм бигерәк.
Фәҡирҙәрҙең йомартлығы -
Быныһы тағы күркәмерәк.

**204**

Йәшәһәң дә бер тау ҡыуышында,
Дөм ҡараңғы бер таш ҡалыпта,
Таш ҡалыпта яңғыҙ ҡалып та,
Хатта шунда ниҙәр эшләгәнең
Ишетелмәй ҡалмаҫ халыҡҡа.

**205**

Кем дә кем ҡарун, һаран,
Эштәре уның харам,
Исламды итә харап.

**206**

Түрә сәүҙә итһә халҡы араһында,
Хыянатсы итеп уға ҡараһындар.

Батша бүләк алһа,
Харам эш ҡылыр.
Ҡазый ришүәт алһа,
Хас кафыр булыр.

**207**

Сәхрәлә ел иҫкән һайын
Ҡош мамығы елберҙәй.
Күңел шул мамыҡ шикелле -
Тын тора белмәй бер ҙә.

**208**

Талаҡ - хәләл. Әммә Аллаһ
Уға бик тә асыулы.
Онотма, мөъмин, шуны.

**209**

Биш ҡат намаҙ - ул эргәндә
Таҙа йылға аҡҡан һымаҡ,
Шул саф һыуҙа биш ҡат ҡойоноп,
Биш сафланып сыҡҡан һымаҡ.

**(Дауамы бар).**

✓ *Аҡса артынан ҡыуыуҙан байып була, әммә был һеҙгә бәхет килтерәсәк тигән һүҙ түгел әле. Ҙур аҡсалы кредит карточкалары хужалары араһында гипертониктар 30 процентҡа күберәк була икән.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ТИРӘК МАМЫҠ ОСОРҒАНДА... кишер ашамай тор

■ Ғәҙәттә, июнь урталарынан ҡала урамдары тирәк мамығына күмелә башлай. Шуға ла аллергологтар был осорҙа махсус диета буйынса туҡланырға кәңәш итә. Рационығыҙҙа кишер, сельдерей һәм һоло бутҡаһы булмаһын. Әгәр ҙә тирәк мамығына аллергия башланһа, шунда уҡ башҡа төрлө ярмалар һәм аҡ икмәк ашауҙан тыйылып тороғоҙ. Табиптар быңдай диетаны ағастар һәм ялан сәскәләре сәскә атҡан осорҙа ла күҙәтергә тәҡдим итә.

■ Һимереү менән бәйле проблемаларҙы тикшереп, Нью Йорк университеты ғалимдары бик ҡыҙыҡлы асыштар яһаған. Ғалимдар әйтеүенсә, ауырлыҡы норманан артыҡ булған кеше менән һөйләшһәгеҙ йәки уға ҡарап ҡына торһағыҙ ҙа аҙыҡтың юғары калориялыһын ашай башлаясаҡһығыҙ. Әгәр ҙә һеҙ быңдай кешеләр менән даими аралашаһығыҙ икән, үҙегеҙ ҙә һиҙмәйенсә тулыһынса юғары калориялы аҙыҡҡа күсеүегеҙ ихтимал. Тимәк, ябыҡ булғың килһә, ваҡытыңды ябыҡтар менән үткәр.

■ Бөгөн тәм-том, башҡа татлы аҙыҡтар етештергәндә мотлаҡ рәүештә буяуҙар һәм консерванттар ҡулланыла. Диетологтар әйтеүенсә, бөтөн буяуҙар ҙа организм өсөн зарарлы түгел, куркума, бета-каротин кеүек тәбиғи буяуҙар файҙалы ла. Шулай ҙа хәҙерге ваҡытта аҙыҡ-түлек сәнәғәтендә осһоҙлo, Е102 тип аталған буяу киң ҡулланыла. Ул аллергия тыуҙырып, тиренең ялҡынһыныуына килтереп кенә ҡалмай, күреү һәләтен дә түбәнәйтеүе ихтимал. Быңан тыш, кеше үҙен насар тоя башлай, кәйефе булмай. Тәм-том составында тартразин тигән матдә булғанда ла уны һатып алыуҙан баш тартырға кәңәш итә белгестәр. Был матдә витаминдарҙың үҙләштерелеүенә тотҡарлыҡ яһай.

■ Яңыраҡ үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, машинаны хәүефле йөрөтөүселәр башҡаларға ҡарағанда депрессия менән йышыраҡ яфалана. Быға тиклем психик стресс, хәүеф тойғоһо, депрессия һәм алкоголизмдың бер-береһе менән бәйле булыуы дәлилләнгән инде. Хәҙер ғалимдар кеше кисергән стрестың һәм уның машина йөрөткәндә даими рәүештә үҙенең ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуы араһында бәйләнеш эҙләй. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, хәүефһеҙлек ҡағиҙәләрен инҡар итеүселәр араһында стресс кимәле ысынлап та юғарыраҡ була. Был һөҙөмтә бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ водителдәргә күберәк ҡағылә. Тимәк, машина руле лә кешенең психикаһына ҙур зыян килтерә ала, ти тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе доктор Скотт-Паркер.

■ Яҡын һәм тоғро дуҫтары күп булған кешенең ғүмере оҙон була. Был фактты Американың Юта һәм Яңы Каролина штаты университеты ғалимдары билдәләгән. Тикшеренеү барышында асыҡланыуынса, кеше ни тиклем күберәк кеше менән аралаша, шул тиклем оҙағыраҡ йәшәй, имеш. Белгестәр әле был феноменды фәнни яҡтан нигеҙләргә ашыҡмай. Шулай ҙа профессор Берт Учино белдереүенсә, социаль әүҙемлек күп яңы тойғолар кисерергә мөмкинлек бирә. Үҙ сиратында, тоғро дуҫтар һәр саҡ ярҙам итергә әҙер, тормош йөгөн дә улар менән күтәреүе еңелерәк.

ГИГИЕНА ҒӘЛӘМӘТТӘРЕ

# ӘҢГӘМӘСЕҢ ЙӨҘӨН СИТКӘ БОРАМЫ?

## Тимәк, ауыҙыңдан насар еҫ килә

Кешеләр менән аралашҡан ваҡытта һәр кемдең үҙен ышаныслы тотҡоһо килә. Быңың өсөн, әлбиттә, ауыҙыңдан насар еҫ сыҡмауы, тының саф булыуы ла мөһим.

Теште таҙартыу - көн һайын үтәлә торған процедура икәнен һәр кем белә. Шулай ҙа, ни тиклем генә тырышһаң да, был процедура ауыҙ ҡыуышлығында барлыҡҡа килгән насар еҫте бөтөрөүгә тулыһынса ярҙам итә алмай. Ауыҙҙан насар еҫ сығыуҙың ике сәбәбе бар. Был тештәрҙе көрәгенсә таҙартмау һәм ашҡаҙан-эсәк эшмәкәрлегенең боҙолоуы. Ике осраҡта ла бактериялар насар еҫтең сәбәпсеһе булып тора.

Кислород булмаған ерҙә йәшәй һәм үрсей торған, микроорганизмдар һауала осоп йөрөгән көкөрт берләшмәләре - көкөртлө водород, метил-меркаптан, кадаврин, путресцин, скатол бүлеп сығара. Хатта бәләкәй генә теш сабыртмаһы ла насар еҫ сәбәпсеһе булыуы мөмкин. Йотҡолоҡ өҫтөнөң үҙенсәлекле төҙөләшлө булыуы арҡаһында ауыҙыңан насар еҫ сығыуын кеше үҙе белмәҫкә мөмкин. Ауыҙ ҡыуышлығы танау менән йомшаҡ аңҡау өлкәһендә тишек менән тоташҡан, һәм беҙҙең еҫ һиҙеү ағзаһы еҫтәрҙе фильтрлау арҡаһында уны билдәләүе ауырға төшә.

Ауыҙ ҡыуышлығы гигиенаһын ҡайғыртыу бер ҡасан да артыҡ түгел. Ит, балыҡ, йомортҡа, һөт ризыҡтары - насар еҫ сығанағы булып торған көкөртлө берләшмәләр бүлеп сығарыусы анаэроб бактерияларҙың төп ризыҡы.

Флосстар - теш араһы ептәре ҡулланыу ауыҙҙа насар еҫтәр барлыҡҡа килмәүгә төп шарт булып тора. Еп теш щеткаһы үтеп инә алмаған теш араларын ентекләп таҙарта. Шулай ҙа теш ҡаҙнаһына зарар килтермәҫ өсөн был ябай ҡулайламаны һаҡ ҡулланырға кәңәш ителә.

Ауыҙҙан насар еҫ килеүҙән һаҡланыуҙың тағы ла бер нисә ысулы бар. Ҡайһы бер аҙыҡ төрҙәре беҙгә ауыҙ ҡыуышлығынан насар еҫ килеүҙән ҡасырға һәм артабан уны булдырмаҫҡа ярҙам итә.

**Петрушка.** Был үлән ауыҙҙан сыҡҡан насар еҫте башҡа ризыҡтарға ҡарағанда яҡшыраҡ нейтралләштерә. Петрушка урынына кориандр, бөтнәк, әрем, эвкалипт, розмарин йәки кардамон ҡулланырға мөмкин. Үрҙә һанап үтелгән үләндәр ауыҙ эсендәге насар еҫте бөтөрөп кенә ҡалмай, шулай уҡ аш һеңдереүҙе лә яҡшырта. Тәьҫире яҡшы булһын өсөн был үләндәрҙе оҙағыраҡ сәйнәргә йәки сәй итеп эсергә кәрәк.

**Йогурт.** Шәкәрһеҙ тәбиғи йогурттар ауыҙҙағы насар еҫ, кариес һәм теш ҡаҙналары ауырыуҙары менән көрәшергә ярҙам итә. Был һығымтаға япон ғалимдары килгән. Улар йогурттың насар еҫтең төп сәбәпсеһе булып торған төкөрөктәге көкөртлө водород кимәлен кәмеүгә булышлыҡ итеүен иҫбат иткән. Шулай уҡ йогуртты көн һайын ҡулланыу ауыҙ ҡыуышлығында насар еҫ барлыҡҡа килтереүсе сульфид кимәлен кәметә. Шулай уҡ был ризыҡты йыш ҡулланыу теш ҡаҙналары ауырыуҙарын барлыҡҡа килтереүсе һәм теш үңендә таптар барлыҡҡа килеүгә булышлыҡ итеүсе зарарлы бактерияларҙы юҡ итә.

**Күҙәнәкҡә бай йәшелсә-емештәр.** Уларға алма, кишер һәм сельдерей инә. Был йәшелсә, емештәр күпләп төкөрөк бүленеүгә булышлыҡ итә, шуның һөҙөмтәһендә ауыҙ ҡыуышлығы еүешләнә һәм теш араларында ҡалған аҙыҡ киҫәктәре юҡ ителә. Йыш ҡына нәҡ шул киҫәктәр ауыҙ ҡыуышлығында насар еҫ барлыҡҡа килеүгә сәбәпсе була ла инде.

**С витаминына бай аҙыҡтар.** Еләктәр, цитрус, ҡарбуз һәм башҡа шундай С витаминына бай аҙыҡтар ауыҙ ҡыуышлығында бактериялар үҫеүенә ҡамасаулаусы мөхит барлыҡҡа килтерә. С витаминын йыш ҡулланыу шулай уҡ теш ҡаҙналарының дөйөм сәләмәтлегенә лә яҡшы тәьҫир итә. Шулай ҙа был витамин организмға тәбиғи аҙыҡ-түлек менән инергә тейеш икәнлеген иҫегеҙҙә тотоғоҙ, юғиһә өҫтәмәләр аш һеңдереү системаһын боҙоуы ихтимал.

ҺӘР КЕМ ҠОЛАҒЫНА

# ӨЛГӨЛӘР УЙЛАНДЫРА - эйәреп ҡара, әйҙә!

### Оҡшамаһа - эшләмә

Табип-психиатр, Лос-Анджелес университеты профессоры Роджер Джеломми кәңәш итеүенсә, бер минут ултырып торорға ла ваҡытығыҙ юҡ икән, эшләргә тейешле эштәрегеҙҙән исемлек төҙөгөҙ һәм уны яртыһына тиклем ҡыҫҡартығыҙ. Америкала хатта "Ябайыраҡ йәшә" тигән йәмәғәт ойошмаһы ла бар икән. Әгәр ҙә шәмбе көнө өйөгөҙҙө йыйыштырығығыҙ килмәһә, йыйыштырмағыҙ йәки аҡса түләп, махсус хеҙмәт тәҡдим итеүселәрҙән эшләтегеҙ. Ҡиммәтме? Һаулыҡ ҡиммәтерәк.

### Яңылыҡтар ҡарама

Бик арып киткәнегеҙҙе тойһағыҙ, кисен телевизорҙан яңылыҡтар урынына тәмле итеп ашарға бешерергә өйрәтеүсе тапшырыуҙар ҡарағыҙ. Быңдай "дауа"ны бер аҙна тирәһе ҡулланһағыҙ, күңелегеҙҙә йәшәүгә дәрт уянып китеүен үҙегеҙ ҙә һиҙерһегеҙ.

### Көл

Көнөнә өс тапҡыр булһа ла рәхәтләнеп көлөп алығыҙ. Был көлкө килгәнен көтөп ултырырға кәрәклеген аңлатмай. Кино ҡарағыҙ, китаптар уҡығыҙ, хеҙмәттәшегеҙҙең көләмәстәрен тыңлағыҙ. Ауыр уйҙар шунда уҡ тараласаҡ, етмәһә, ихлас итеп көлгән саҡта тәндең һелкенеүе елкә һәм муйын мускулдарындағы көсөргәнеште юҡҡа сығарасаҡ.

### Барыһын да контролдә тотма

Көсөргәнештән ҡотолорға теләһәгеҙ, "Минең кеҫә телефоным юҡ" тигән фразаны ятлап алығыҙ. Һәр ваҡыт бәйләнештә булырға тимәгән дә инде. Артыҡ коммуникабеллек - тыныслыҡ юғалтыуҙың иң дөрөҫ ысулы, ти психологтар. Бик мөһим яңылыҡты ишетмәй тороп ҡалыуҙан ҡурҡһағыҙ - телефоныгыҙға яуап биреүсе автомат ҡуйығыҙ.

### Таңды матур уйҙар менән ҡаршыла

Беҙ, ғәҙәттә, иртән уяныу менән көндәлек эштәрҙе барларға тотонабыҙ. Табиптар әйтеүенсә, шуға ла стресс кимәле был ваҡытта бигерәк юғары була, йөрәк өйәнәктәре лә көндең түгге яртыһында йышыраҡ осрай. Ә уянғас та матур уйҙар уйлау йоҡонан ысынбарлыҡҡа күсеүҙе еңелләштерәсәк, көнөгөҙ ҙә тынысыраҡ үтәсәк.

### Аҡса артынан ҡыума

Әгәр ҙә аҡса табыу процесы һеҙҙе бәхетһеҙ яһай икән, артыҡ аҡса эшләү мөмкинлегенән баш тартығыҙ. Аҡса артынан ҡыуыуҙан байып була, әммә был һеҙгә бәхет килтерәсәк тигән һүҙ түгел әле. Ирвайн университетында (Калифорния) үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҙур аҡсалы кредит карточкалары хужалары араһында гипертониктар 30 процентҡа күберәк була икән.

### Замана техникаһы

Күҙ алдына килтерегеҙ: бер ҡолағына плеерҙың, икенсе ҡолағына кеҫә телефонының ҡолаҡсындарын тыҡҡан, башы өҫтөндә антенна күренеп торған спорт кейемендәге оло ғына йәштәге ҡатын ҡала паркы буйлап йүгерә, ти. Бәхетме был? Юҡ - стресс! Беркли (Калифорния) университетының тикшеренеүҙәр үҙәге директоры Америк Азеведо фекеренсә, кеше үҙен замандың һәр бер яңы техникаһы менән уратып алырға тырыша. Тормошоғоҙҙо был әйберҙәрһеҙ күҙ алдына килтерә алмаһағыҙ ҙа ҡайһы бер саҡта машинаһыҙ, телефонһыҙ, музыкаһыҙ йәшәүҙе йөрөп алығыҙ.

### Темпераментҡа ҡарап - эш урыны

Мәсәлән, америкалыларҙың 77 проценты эштә стресс кисерә икән. "Минең етәксем насар", "Аҡса өсөн генә эшләйем", "Йомаға тиклем нисек йәшәргә?" тигән уйҙар борсой икән, эш урынын алыштырыу тураһында уйлана башлаһағыҙ ҙа була. Белгестәр дүрт төрлө эшсе темпераментын билдәләй: идеалист, рационал, карьерист һәм һөнәрсе. Үҙенә һәм үҙенең графиги буйынса эшләргә яраҡлан һөнәрсәгә офиста түҙеп ултырыуы ҡыйын. Аныҡ күрһәтмәләр яраҡлан рационалға үҙаллы эшләү оҡшамай. Карьерист эш урынында төрлө интригалар булыуын хуп күрә, ул көрәш шарттарында ғына нимәгәлер өлгәшергә һәләтле. Идеалист иһә үҙенең шәхси баһаһына ныҡ ышана һәм үҙен кем менәндер сағыштырыуҙы бөтөнләй күрә алмай.

### Үҙеңде гөбөргәйел итеп хис ит

"Минең бөтөнләй ваҡытым юҡ!" - был клише тормош темпы тураһында түгел, ә хроник стресс тураһында һөйләй. Сөнки ваҡыт - ул тормош, әгәр ҙә ваҡыт юҡ икән, тормош та бына-бына тамамлана тигән һүҙ түгелме һуң? Ғаилә докторы булып эшләүсе Каролайн Майерс эстән генә "Мин бер ҡайҙа ла ҡабаланмайым! Бер ҡайҙа ла һуңламайым..." тип әйтеп йөрөргә ҡуша. Бер нәмәгә лә өлгөрмәҫтәй булып ҡабаланыуҙан бер файҙа ла юҡ, шуға ла йәйлап, әммә ышанысы итеп алға барығыҙ.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ

# ИМАН ҠЕҮӘТЕ,

## йәки Мөхәммәт бәйғәмбәр өлгөһөнөң уйландырғаны



### "Мине "Һуд" сүрәһе" ҡартайтты"

Әбүбәкер Хәҙрәт (р.ғ.) Аллаһ Рәсүленән һорай: "Эй, Аллаһ Рәсүле! Сәсегеҙҙең ағарғанын күрәм, һеҙ ҡапыл ғына ҡартайып киттегеҙ; берәй ҡайғыға дусар булдығыҙмы әллә?" Ике донъя бәйғәмбәре шулай тип яуап бирә: "Һуд", "Ваҡиға", "Мурсәләт" - бына ошо сүрәләр мине ҡартайтты". "Һуд" сүрәһендә уға шулай тип әйтелә (яҡынса мәғәнәһе): "Һинең менән тәүбә ҡылғандар һәм һин, әмер ителгәнсә, тура юлда нык тороғоҙ. Сиктәр аша үтмәгеҙ" (Ҡөрьән, 11:112). Һәм был тура юл Хаҡ Тәғәләнең үҙе тарафынан һөйөклөһө Мөхәммәд Мостафа бәйғәмбәр (с.ғ.с.) өсөн һыҙылған була. Һәм унан мәңгегә ошо һыҙылған юлдан барыу талап ителә...

"Мурсәләт" сүрәһендә кешеләрҙең Ожмахта һәм Тамуҡта айырым төркөмдәргә бүленеүе һәм Тамуҡта бөйөк ҡурҡыуҙан кешеләрҙең нисек өслөтә бөгөлөп төшөүҙәре тураһында бәйән ителә. Был сүрәләрҙә һөйләнелгәндәр Мөхәммәд бәйғәмбәрҙе (с.ғ.с.) шаҡ ҡатыра һәм ҡартайта...

### Теге донъяға ҡарашы

Бер сәхәбә өйөндә Ҡөрьән уҡып ултыра. Тауышы урамдағыларға ла ишетелеп тора. Был мәлдә Аллаһ Рәсүле ошо өй тәңгәленән үтеп барған була. Ҡапыл унын төҫө ҡаса һәм ул тубыҡланып төшә. Гүйә, аяттар уны шулай ҡалтыранырға мәжбүр итә. Эйе, аяттың ҡаты иҫкәртеүе уға шулай көслө тәьҫир итә.

Аяттарҙа шулай тип әйтелә: "Беҙҙә бит - бығауҙар һәм йәһәннәм уты (язаларға), һәм шулай уҡ боғаҙҙарына тығылыр ризыҡ һәм ғазаплы яза бар" (Ҡөрьән, 73:12, 13).

Кемгә-кемгә, ә бит уға был һүҙҙәр өсөн хафаға ҡалырға түгел, сөнки ул - Аллаһтың Рәсүле. Ләкин Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) беҙгә Аллаһты ҡәҙерләү, таныу, хөрмәт итеү һәм Унан ҡурҡыуҙың һабағын бирҙе.

### Рәсүл бөтәһен дә Күреүсенең ҡаршыһында

Абдуллах ибн Масуд (р.ғ.) һөйләүенсә: "Бер мәл Рәсүл: "Һин Ҡөрьән уҡы, ә мин тыңлармын",- тине. Мин: "Эй, Аллаһтың Рәсүле! Ҡөрьән бит һинең аша индерелде, уны мин нисек уҡыйым ти инде?!" -тип һораным. Рәсүл шулай яуапланы: "Мин Ҡөрьәнде бүтәндәр уҡығанда тыңларға яратам". Мин "Ән-Ниса" сүрәһен уҡырға керештем. "Һәм Беҙ һәр өммәттән шаһит саҡырғанда һәм уларға ҡаршы һине (Эй, Мөхәммәт!) шаһит итеп саҡырғанда нимә булыр?" (Ҡөрьән, 4:41) тигән аятты уҡығандан һуң: "Булды, етте", -тигәнде ишеттем. Аллаһтың Рәсүленә табан боролдом, унын илағанын күрҙем, күҙ йәштәре йылға булып аға ине. Тәрән кисерештән йөрәге саҡ-саҡ ярылырҙай. Сөнки әлеге аят уға Хөкөм көнөнөң ҡот осҡос ваҡиғаһын бәйән итте".

### Унын уйланыуҙары

Ғәйшә һөйләгән хәл: "Бер төндә Аллаһтың Рәсүле: "Эй, Ғәйшә! Рөхсәт итһәң, мин был төндө Аллаһҡа ғибәҙәт итеү менән үткәрер инем", тине. Уға: "Мин һинең менән бергә булырға яратам, шул уҡ ваҡытта һинә оҡшаған бөтә нәмәне лә яратам", - тинем.

Беҙҙең бәйғәмбәребеҙ таң атҡансы намаҙ уҡый: "Шул хаҡ, аҡылы булғандар өсөн ғаләмдәрҙең һәм ерҙең яралтылыуында һәм көн менән төндөң алмашыныуында аят бар" (Ҡөрьән, 3:190). Ошо аятты уҡығандан һуң ул илай. Билал хәҙрәт(р.ғ.) иртәнге намаҙға килгәс, Бәйғәмбәргә (с.ғ.с.) өндәшә: "Эй, Аллаһ Рәсүле! Ни өсөн һин үҙеңә ауырлыҡ яһайһың? Аллаһы Тәғәлә һинең үткәндәге һәм киләсәктәге барлыҡ гонаһтарыңды ярлыҡаны бит". Бәйғәмбәр шулай тип яуаплай: "Мәрхәмәт итеүсе Аллаһы Тәғәләгә мин шул уҡ дәрәжәлә шөкөр итә белеүсе ҡол була алмайыммы ни?"

Ни өсөн һуң ул саҡта Аллаһ Рәсүле илаған? Үҙенең камил булмауы арҡаһында тейешле дәрәжәлә шөкөр итә белеү кимәленә етә алмауынан шикләнеп. Шулай булғас, камиллыҡ өлгөһө булған Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ниндәйҙер шәһүәгә эйәреүе, яҙыҡ эш ҡылыуы мөмкинме?

Беҙҙең Бәйғәмбәребеҙ гонаһ яһамаҫ өсөн бөтә тыйыуҙарға шул тиклем нык иғтибарлы булған, Хаҡ Тәғәләнең һәр әмеренә шул уҡ дәрәжәлә нык буйһонған. Унын сафлығына, иманына күҙ һалғанда, бүтән бер ниндәй ҙә дәлилдәр эҙләргә кәрәкмәй.

Унын һымаҡ йәшәү рәүешен тағы кем генә алып бара алыр ине икән? Бик икеле. Намаҙҙы теүәл үтәүе, үҙенә талапсан булыуы, теләктәрен теҙгендә тотоуы. Унын тормошо тулыһынса тиерлек Аллаһҡа ғибәҙәт итеүгә арналды. Буш сағы булмаған да. Тормошо ғибәҙәтлек, намаҙ уҡыуҙан ғына ғибәрәт түгел, әлбиттә. Ул нимә генә эшләһә лә, быны Аллаһҡа хеҙмәт итеүгә арнаны (Әлхәмдүлилләһи).

Унын тураһында "иманлыларҙан да иманлы" тип әйтеү генә лә аҙ, унын иманлылығы һәм был донъя өсөн мөкиббән китмәүе икенсе һүҙҙәр һәм сағыштырыуҙар талап итә.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ФАТИХАЛЫ ҒАИЛӘ УСАҒЫ -

## ерҙәге ожмах сағылышы ул



**Ғаиләне тәьмин итеү бурысы ир-егет өҫтөндә. Ә ғаилә менән идара итеү яуаплылығы ла ир-егет иңендәме?**

Ислам дине ғаиләне тәьмин итеү бурысын ир-егет иңенә һалған. Ләкин был, ул ғаилә ағзаларынын бөтә теләктәрен дә үтәргә тейеш, тигәнде аңлатмай. Унан тик Шәриғәт буйынса рөхсәт ителгән ихтыяждарҙы ҡәнәғәтләндереү генә талап ителә. Хатта хәлле кеше лә үҙенең бөтә теләктәренә юл ҡуйырға тейеш түгел. Бөтә теләктәргә юл ҡуйыу һаранлыҡ һәм ҡәнәғәтһеҙлек тыуҙыра. Үҙенең теләген ҡандырып ҡына йәшәгән кешенең мин-минлеге, һуңғы һөҙөмтәлә, бөтә ғаиләне хәүеф аҫтына ҡуя. Шуға күрә, әгәр мөмкинлек булһа, үҙеңдең бөтә теләктәреңде тыйып, иң беренсе рухи ихтыяждар тураһында уйланып, мохтаждарға ярҙам итеп, шунын менән Аллаһы Тәғәләнең ризалығына өлгәшеү мөһим. Иң ҙур һынау - байлыҡ менән һынау икәнен һәм ул көслө вәсвәсә икәнен онотorға ярамай.

Һәр нәмәлә алтын урталыҡ булырға тейеш. Һаранлыҡ кеүек үк, артыҡ тәләфләү ҙә гонаһҡа инә. Хатта хәлле ир менән ҡатындың да аҡсаларын кәрәкмәгән нәмәләргә туҙҙырырға хоҡуғы юҡ. Береһе лә: "Был минең байлығым, нисек теләйем, шулай туҙҙырам", - тип әйтә алмай, сөнки мал-мөлкәт - Аллаһтың аманаты, унын өсөн Ҡиәмәт көнөндә: "Ҡайҙа һәм нимә өсөн тотондоң?" - тип һораласаҡ. Һәм шул ваҡытта һәр тотонолған тиндәр өсөн Аллаһы Тәғәлә алдында хисап бирергә тура киләсәк. Шуға күрә, тәләфләүҙе сабырлыҡ менән алмаштырыу мөһим.

Элек бөтә йәмғиәт әҙ менән ҡәнәғәтләнә белеү девизы менән йәшәгән. Исраф итеү, яҡшы шарттарҙы яратыу, туя белмәү һәм маҡтаныу сәхәбәләргә ят булған. Улар ваҡыты килеп еткәс нәфсенең ояһы ҡәбер буласағын аңлаған. Уларҙың иң яҡын дуҫтары Аллаһы Тәғәлә һәм унын Бәйғәмбәре (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) булған. Уларҙың күңелендә һәр ваҡыт: "Аллаһы Тәғәлә беҙҙән нимә теләй? Унын Бәйғәмбәре беҙҙә нимә күрергә теләй?" - тигән һорауҙарға урын булған. Шуға күрә беҙ рухи яҡтан үҫешергә һәм йәмғиәтебеҙҙә шундай бәхет һәм именлек булдырырға тырышып, сәхәбәләрҙең изгелекле тормошонан өлгө алырға тейешбеҙ.

**Усман Нури ТОПБАШ.**
**(Дауамы бар).**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Тормош энергияһы менән банктағы иҫәбегеҙҙең бәйләнеше

Кеше организмы энергетик уратма менән уратып алынған. Был физик тәндең күсермәһе. Энергетик уратманы үлсәп, иң мөһиме, уны үҙгәртеп була. Ул аң менән тәнде бәйләп тороуҙа ҙур роль уйнай, шулай уҡ сәләмәтлеккә ыңғай йоғонто яһай. Йәғни ул икенсе энергетик уратмалар менән бәйләнештә тора - ғаилә ағзаларына, яҡындарығыҙға, башҡа мөнәсәбәттәргә йоғонто яһай. Ғәмәлдә, беҙҙең менән нимә генә булмаһын, тәүҙә ул энергетик уратма кимәлендә тормошҡа аша.

Көҙгөгә ҡарап, ҡасандыр нимәнелер яңылыш эшләгәнегеҙҙе йәки яҡшыраҡ эшләгәнегеҙҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Бәлки, уға үҙегеҙгә үҙегеҙ әле лә дөрөҫөн әйтергә ҡурҡҡан бәләкәй генә бер нәмә сәбәпсе булғандыр? Һәр кемдә үҙе лә һиҙмәҫтән баҫып ҡалдырған һыҙат була. Уны баҫып ҡалдырыу энергетик уратмағыҙға йоғонто яһай. Унын боҙолоуына килтерә, йәғни, үҙ сиратында, энергия ағымына һәм уға бәйле булған бөтөн нәмәгә: сәләмәтлеккә, мөнәсәбәттәргә, именлеккә, байлыҡҡа кәртә булып тора.

НАСА-ның Йыһанға осоуҙар үҙәгенең ғалим-тикшеренеүсеһе Барбара Бреннан 20 йыл кешенең энергетик уратмаһын үлсәү һәм өйрәнеү менән шөғөлләнә. Ул, кешелә үҙе риза булмаған нимәләр була икән, тимәк, "ул энергетик структуралағы үҙгәрештәрҙе тарта - был үҙеңде ғәфү итә белмәү менән бәйле", ти. Артабан: "Үҙен ғәфү итеп, кеше үҙ уратмаһындағы энергияға юл аса, һәм был тормошта кәрәк булған энергия ағымын тергеҙә", - тип раҫлай.

Кем булыуығыҙ, нимә менән шөғөлләнеүегеҙ мөһим түгел - үҙегеҙҙе ғәфү итегеҙ. Был һеҙгә, хәрби наградаларығыҙға, спорт приздарына, ныҡлы ғаиләгә ҡарамаҫтан, файҙа ғына килтерер.

Аныҡлап әйткәндә, был етди эш һәм һеҙгә кешене өс өлөшкә бүлеп, унын һәр ҡайһыһынан айырым ғәфү үтеүҙе һорарға кәрәк. Был өлөштәр булып аҫҡы аң, аң һәм юғары аң тора.

Тормошоғоҙҙағы иң мөһим кеше менән мөнәсәбәттәрҙе яҡшыртыу

Түбәндә һеҙҙең энергетик уратмағыҙҙы һәм барлыҡ файҙалы нәмәләрҙең, шул иҫәптән, аҡса ағымын да таҙартырға ярҙам иткән өс күнекмә бирелә.

Хәҙер һеҙ үҙегеҙҙе ғәфү итергә өйрәнәсәкһегеҙ һәм быны түбән кимәлдән, тәрән булмыштан, шәхестең төпкө өлөшөнән - аҫҡы аңдан башлаясаҡһығыҙ. Аҫҡы аң ер аҫты мәмерйәһенә оҡшаған, унда беҙҙең барлыҡ хәтер һаҡлана. Бер ниндәй хәүефһеҙ һеҙҙең һуңғы тинегеҙгә бәхәс ҡорорға мөмкин: ошо хәтер араһында алға китергә ҡамасаулағандары, байлыҡ энергияһы ағымын тотоп тороусылары ла бар.

Артабанғы бер минутлыҡ дәрестәрҙә һеҙ үҙегеҙҙе аңлы һәм аңһыҙ кимәлдә ғәфү итә аласаҡһығыҙ.

Карл Юнг аңды һыу һауыты менән сағыштырған. Беҙ был символды ҡулланасаҡбыҙ: һыуҙа һеҙ үҙ сағылышығыҙҙы күреп, уны ғәфү итәсәкһегеҙ.

Күнекмәләр менән киләһе һанда таныштырырбыҙ.

**Роберт СТОУН.**



## 30 МАЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.40 "Жить здорово!"
10.50 "ЖКХ"
11.45 "Женский журнал"
12.00 Новости
12.20 "Модный приговор"
13.20 "Детективы". Сериал
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Группа счастья", 1-я серия. Сериал
22.30 "План "Кавказ-2": Метастазы". Док. фильм
23.30 Ночные новости
23.50 "Следствие по телу", 12-я серия
00.45 "Большие надежды". Мелодрама
02.50, 03.05 "Суперагент Саймон"
03.00 Новости
04.25 "Хочу знать" с Михаилом Ширвидтом"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "С новым домом!"
10.00 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.50 "Я - киборг. Человек будущего. Какими мы будем". Док. фильм
12.50 "Кулагин и партнеры". Сериал
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.05 "Ефросинья. Продолжение", 63-я серия
16.00 "Вести"
16.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
16.50 "Все к лучшему", 91-я серия
17.55 "Институт благородных девиц", 166-я серия
18.55 "Прямой эфир". Ток-шоу
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Бригада", 7-я и 8-я и 9-я серии. Сериал
00.10 "Вести+"
00.30 "Андрей и Зоя"
01.20 "Профилактика"
02.35 "Смертельные преследователи". Вестерн
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### НТВ

04.55 "НТВ утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.00, 13.00 "Сегодня"
10.20 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
10.55 "До суда"
12.00 "Суд присяжных"
13.25 "Прокурорская проверка"
14.40 "Давайте мириться!"
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара-2". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Москва. Центральный округ-3". Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Честный понедельник"
00.25 "Школа злословия"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Суд присяжных"
02.45 "До суда"
03.45 "Прокурорская проверка"

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 "Новости" (на башк. яз.)
09.15 "Полезные новости"
09.30 "Неслучайные люди"
10.00 "Забытые войны. Итоговая программа"
10.30 "Специальный репортаж"
10.45 "Учим башкирский язык"
11.00 "Гора новостей"
11.15 "Городок АЮЯ"
11.30 "Приключения мастера кун-фу"
12.00 Новости (на русск. яз.)
12.15, 23.00 "Замандаштар"
12.30, 23.15 "Орнамент"
12.45 "Надо знать!"
13.00 "Реалити-шоу "Весы"
14.00 "Петербургские тайны"
15.00 Новости (на башк. яз.)
